✓*Йыш ҡына милләтте бер кеше ҡотҡара; йыш ҡына милләтте бер кеше харап итә.*

***П. Буаст***

✓*Әгәр ҙә беренсе осраған кеше тарафынан көс ҡулланыуға, мыҫҡылланыуға дусар ителә ала икән, ул милләткә аҡланыу юҡ.*

***Карл МАРКС.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

14 - 20 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№20 (438)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ҡыпсаҡ ырыуы бейе...**

Ҡарағужаҡ Мишәуле кенәҙгә - ейәндәренән



**6-7**

**Көсләләргә һыйыналар,**



**8-9** йәки Яңы башҡорт имиджы тураһында...

**Арғымаҡ ат юл башлар...**

аҡыллы егет ил башлар



**11**

**Иман ҡеүәте,**

йәки Мөхәммәт бәйғәмбәр өлгөһөнән уйландырғаны



**13**

**14 ТВ-программа**


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Быуындар кусәгилешлегенең өҙөлөп ҡалыуы йәштәр өсөн оло фажиғәгә тиң икәнен таныйһығыҙмы?

***Гөлбаныу СИБӘҒӘТОВА, уҡытыусыһы:*** Эйе, тотош быуындарҙың эскелек арҡаһында юҡҡа сығыуы, күсәгилешлектең өҙөлөп ҡалыуы йәштәр өсөн фажиғә. Ололар йәштәрҙе әрләүҙе, ғәйепләүҙе дауам итә, әлбиттә. Йәш кеше саҡ ҡына бәйһеҙерәк, яуапһыҙыраҡ икән, ул кемдән өлгө ала икән һуң? Әгәр уның атаһы эскесе, шулай уҡ олатаһы ла эскесе булған икән, уға ни эшләргә? Шөкөр, "Алма ағасынан алыҫ төшмәй" тигән мәҡәл асылын инҡар итеүсе йәштәребеҙ күбәйә бара. Улар атаһы, олатаһы быуынын ашатлап, уларҙан алдағы тамырҙарын барлай, шәжәрәһен өйрәнеп, быуындар сылбырындағы лайыҡ булырҙай өлгөләрҙе эҙләй, өҙөлгән быуындар сылбырын ялғарға маташа. Өлгө алырҙай, идеал булырҙай атабабаларыбыҙ бик алыҫта тороп ҡалған икән шул. Мин үҙем, мәҫәлән, алтмышҡа яҡынлап барған кешемен. Минең бала сағымда уҡ, тимәк, 50 йылдар элек ауылда айыҡ табындар булмай торғайны. Атай, әсәй ҙә ҡунаҡ табындарын, байрамдарҙы шешәбикәһеҙ үткәрмәне. Бәхеткә күрә, шул саҡта эскелектең - яман, айыҡлыҡтың яҡшы икәнен аңлата торған өләсәйебеҙ булған эргәлә. Уның яман ғәҙәттәргә протесы беҙгә лә күскән. Тимәк, минең быуыным өләсәйем, уның һөйләүе буйынса ғына белгән дин әһелдәре булған олатайҙарым менән бәйләнгән. Ә кем ғаиләһендә әлегеләй өләсәйҙәр булмаған, улар ата-әсәһенең йәшәйеш мөхитен, ул бик сәләмәт булмаған һүрәттә лә, тәбиғи тип ҡабул иткән. Бына ҡайҙа ул фажиғә!

***Иҙел РӘХИМОВ, студент:*** Мин был йәһәттән бәхетлемен, сөнки ата-әсәйем дә, олатай-өләсәйҙәрем дә минең өсөн өлгө булды, эсмәнеләр һәм эсмәйҙәр. Хәҙер шуны аңлайым: ғаиләнең һәм, ғөмүмән, нәҫелдең сәләмәт, айыҡ тормошта йәшәүе балаларҙың киләсәген, яҙмышын билдәләй. Мәктәптә уҡыған саҡта күҙәтергә тура килә ине: проблемалы ғаиләләрҙә үҫкән балалар коллективтан ниміәһе мендер айырылып тора, өҫбашы ла бөтөн түгел, күңеле лә китек, йә асыулы, ярһыу, йә аҫтыртын. Аҙаҡ ундай бала атаһы юлынан китә лә бара. "Ояһында ни күрһә, осҡанында шул була" тимәгән бит халыҡ юҡҡа ғына. Әлбиттә, бөтәһе лә эскелеккә бирелә, тип әйтмәйем, төрлөһө бар. Атай, олатайҙарының насар ғәҙәтенә кемдәрҙер ғибрәт итеп тә ҡарай, шуға күрә үҙе эсмәй, матур ғаилә ҡороп, яҡшы ғына йәшәп китә. Ә инде көсһөҙ, рухһыҙ йәштәргә нәҫелнәсәбенең алама ғәҙәттәре емергес йоғонто яһай. Идеал, өлгө эҙләү тигән нәмә ундайҙарҙың башына ла инеп сыҡмай.

***Сания ӘМИНЕВА, педагогия ветераны:*** Ысынлап та, тамырҙарын юғалтҡан быуын хәҙер берәү генә түгел, бер нисәү. Туған ҡартатаһын, өләсәһен йүнләп белмәгән кешеләр ҙә күп. Ярай ҙа улары йүнле кешеләр булған булһа... Әлбиттә, бында айырым кешеләрҙе генә ғәйепләү дөрөҫ тә булмаҫ. Заманына күрә үҙгәрә торҙо әҙәм балаһы ла. Көслəп тарихыбыҙҙы онотторорға маташыуҙар, Хрущев заманынан башланып, торғонлоҡ йылдарында сәскә атҡан эскелек кеүек афәт бөтәһен дә онотторҙо. Бара-тора бит хатта йөрәген ярып сыҡҡан балаһынан да баш тарта башланы әсәләр. Йәш быуында идеал, өлгө тәрбиәләү йәһәтенән бөгөнгө көн сәйәсәтен дә маҡтамаҫ инем.

Үҙем ҙур ғаиләлә тыуып үҫтем. 9 бала инек. Атайыбыҙ ҙа, әсәйебеҙ ҙә педагогия ветерандары, беҙгә матур, дөрөҫ тәрбиә бирҙеләр, мең рәхмәтлемен уларға. Яңыраҡ ҡына "Киске Өфө"лә ҡустымдың ҡыҙы Лилиә тураһында очерк баҫылғайны, шунда ул: "Атайымдан күреп - спортсы, олатайымдан күреп баҡсасы булдым", - ти. Өҫтәүенә, өс йәшлек сағында олатаһы Лилиәне йүгәнһеҙ атҡа мендереп йөрөткән. Был тормоштан алынған бик образлы деталдәр. Тимәк, олатаһы үҙ миҫалында ейәндәре тормошон гөл-баҡса итергә тырышҡан, атҡа мендереп, ҡанатландырған, күңеленә илһам өҫтәгән! Бына шул арҡала Лилиәбеҙ маҡсатҡа ынтылышлы, тәүәккәл, ҡыйыу, эшсән булып үҫеп килә, собханалла. Быуындар бәйләнешенең идеаль вариантын мин бына ошо миҫалда асыҡ күрәм.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

### ҺАЙ, МАҺИРҘАР!

# ҠУЛЫҢ ЭШ БЕЛҺӘ...

## ярты бәхет - шул, тиҙәр

**Ат тешенән, егет эшенән билдәле, йәки, бөркөттө осоуынан, егетте эшенән таныйҙар, тиҙәр беҙҙең халыҡта. Өфө сәнғәт училищеһы биҙәү-ғәмәли сәнғәте факультетының III курс студенты Ҡадир ДӘҮЛӘТБАЕВтың ағастан яһаған ҡул эштәре менән танышҡас, халҡыбыҙҙың ошо мәҡәлдәре телгә килде. Уның ағастан биҙәп, һырлап, юнып эшләгән төрлө ҡул эштәре күҙҙең яуын алып тора, бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Сабыр, тыныс, тыйнаҡ холоҡло егет менән әңгәмәбеҙ ағас оҫталығы, һөнәр, йәшәйеш тураһында барҙы. Һүҙҙе оҫтаның үҙенә бирәйек.**



Дауамы 12-се биттә.

*✔ Милләттәрҙе үҙ иленән ҡыуыусылар башҡорт яугирҙарының ошо тиңһеҙ батырлығын күреп, был аҙымға барырға баҙнат итмәгән тип һөйләр ине элек шул һуғышта булған башҡорт яугирҙары, хәҡиҡәткә асыҡ күҙ менән ҡарап.*



*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# КӘРӘГЕҢ ТИРӘГЕҢДЕ ЙЫҠТЫРА

**Бер уйлағанда был әйтемдең мәғәнәһе ябай ғына аңлашыла кеүек. Кәрәгең, ысынлап та, тирәгеңде лә йыҡтыра инде ул. Тормош итәгеңде ҡырҡып, еңеңде ямарға ла өйрәтә. Әммә был әйтемдең көнкүрешкә бәйләнгән ябай аңлатмаһынан тыш төпкәрәк йәшеренгән мәғәнәһе лә бар. Шуны асыҡлап ҡарайыҡ.**

Әйтемдең туранан-тура аңлашылған мәғәнәһенә бәйле ваҡиға хаҡында атайым һөйләгәйне. Ҡасандыр йорт тотҡаһы булған ир, атай һуғышҡа киткәс, аслыҡтан һәм өшөүҙән интеккән балаларын ҡотҡарыр өсөн әсәй кеше, урманға утынға барырға хәле ҡалмағанлыҡтан, йорт янындағы тирәкте йығып яғырға мәжбүр була. Кем белә, бәлки, ул тирәкте ире ултыртҡандыр һәм ул тирәк, әгәр ҙә һуғыштан ҡайта алмаһа, уның иҫтәлеге лә булып ҡалғандыр. Әммә бында балаларҙың ғүмерен һаҡлау ихтыяжы әсә кешегә ошондай ҡәҙерле ҡомартҡыға ла ҡул күтәрергә һәм уны ҡырҡырға мәжбүр иткән. Ошо күҙлектән ҡарағанда тирәгеңде йығыу аяныслы тормош хәҡиҡәте хаҡында ла һөйләй.

Был әйтемдең тағы ла төпкәрәк йәшерелгән мәғәнәһен табыу өсөн халҡыбыҙ тарихы төпкөлөнә төшәйек. "Аямаған йәнен, түккән ҡанын, һис бирмәгән башҡорт Уралын", тип әйтелә мәшһүр "Урал" йырында. Был йырҙың "Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған, шунда ята батырҙар һөйәге", тигән һүҙҙәре лә бар. Йырҙарыбыҙҙа ғына түгел, ғөмүмән, халҡыбыҙ тарихын сағылдырған һәр эпоста, ҡобайырҙа һәм башҡа жанр әҫәрҙәрендә бар илебеҙҙең, телебеҙҙең, еребеҙҙең, халҡыбыҙҙың киләсәге өсөн уның ҡаһармандарының үҙ ғүмерҙәрен, йәндәрен аямайса фиҙа итеүҙәре хаҡындағы тарих. Яуҙарҙың да, дошмандарҙың да ниндәйҙәре генә булмаған тарихта. Һәр осраҡта ла халҡыбыҙ үҙенең киләсәге хаҡына кәрәгенә "тирәген йығырға" мәжбүр булған.

Тирәктәр генәме? Имәндәй ирҙәр, һөлөктәй егеттәр ҡорбан булған, ғәзиз башын һалған был яуҙарҙа. Һәр хәлдә, кәрәгеңдең тирәгеңде йыҡтырғанын аңлаған ил аҡһаҡалдары. Ислам дининдәгесә, ҡорбан килтермәйенсә, ил, халыҡ өсөн ҡәҙер төндәре асылмаһын да, яҡты көндәр килмәҫен дә бик яҡшы белгән улар. Ирҙәр, батырҙар артыҡ булған өсөн киткәнме ни 28 башҡорт полкы сафында Наполеонға ҡаршы башҡорт яугирҙары? Улар Парижға тәүгеләрҙән барып ингән. Тик уларҙың күпмеһе генә тыуған иленә әйләнеп ҡайта алды икән?

Бронялы, машиналы Бөйөк Ватан һуғышында башҡаларҙың күҙ алдында мәрәкә өсөн генә танкыға ҡаршы ҡылыс күтәргәнме ни Башҡорт кавалерия дивизиялары яугирҙары? Рәсми булмаған мәғлүмәттәр буйынса шуны ла беләбеҙ: башҡорт халҡын Бөйөк Ватан һуғышында депортациянан хәрби берекмәләр араһында иң күп Советтар Союзы Геройын биргән Башҡорт атлы кавалерия дивизияһы яугирҙары танкыларға ҡаршы ат менән ҡылыс күтәрен барып ҡотҡарып ҡалған икән. Милләттәрҙе үҙ иленән ҡыуыусылар башҡорт яугирҙарының ошо тиңһеҙ батырлығын күреп, был аҙымға барырға баҙнат итмәгән тип һөйләр ине элек шул һуғышта булған башҡорт яугирҙары, хәҡиҡәткә асыҡ күҙ менән ҡарап. Ул саҡта был хәбәр шыбырҙап ҡына, ҡолаҡҡа ғына әйтелә ине. Һәр хәлдә, бындай батырлыҡҡа һыбайлы яугирҙар аңһыҙ рәүештә бармаған, милләт олонон һаҡлар өсөн киҫелгән тирәктәй ауған улар. Киләсәктә был хәҡиҡәт тулы яңғыраште әйтелер әле тип ышанғы килә.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**"Кәрәгең тирәгеңде йыҡтыра" тигән әйтемде шулай уҡ ғаиләңдәге, илеңдәге именлек, тыныслыҡ хаҡына үҙ принциптарыңдан тайпылып, кешеләрҙе кисерә, ғәфү итә белеү һәләтенә лә бәйләп аңлатырға мөмкин. Һәр хәлдә, нимәнелер бирмәйенсә, икенсене алып та булмай. Был юҫыкта әйтем халҡыбыҙҙың "Буштың атаһы үлгән" тигән һүҙе менән дә ауаздаш. Милли идеяға торошло аҡылды үҙенә һыйҙырған әйтем ул.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*ИШАРА*

**Үҙәк баҫмаларҙы ҡараштырып сыҡһаң, "Яңы завод төҙөләсәк", "Эш хаҡын арттырыу ҡарала", "Телефондан һөйләшеү арзанаясаҡ" тип уҡыйһың һәм үҙгәртеп ҡороу башланған йылдарҙа телеэкрандарҙан яңғыраған бер йыр иҫкә төшә. Иҫегеҙҙәме? Ҡалын тауыш:**

**"Здравствуйте товарищи, начинаем**
**Программу телепередач на завтра, на завтра..."**
**Ә һуңынан нәҙек тауыш менән ҡушымтаһы китә:**
**"Нет, нет, нет, нет, мы хотим сегодня,**
**Нет, нет, нет, нет мы хотим сейчас..."**

# БӨТӘҺЕ ЛӘ ЯҠШЫРҘЫ...

## тип ишетке килә лә бит

Бөтәһе лә иртәгә, киләсәктә буласаҡ, тип йәшәнек. Социализм төҙөнөк, коммунизм төҙөргә хыялланып йәшәгәндә ҡапыл ҡырҡа артҡамы, унғамы, һулғамы бороло, капитализм төҙөй башланыҡ.

Хәҙер ғалимдар ҡатнашлығындағы тапшырыуҙарҙы йыш ойошторалар. Марс планетаһына осоу тураһындағы бер әңгәмәлә журналист: "Бына һеҙ Марста атмосфера ла, һыу ҙа бар, тинегеҙ, ә нинә унда йәшәүсе юҡ һуң?" - тип һораны. Әллә был ғалимдың юмор тойғоһо бик юғары кимәлдә инеме икән, ул: "Сөнки бөтә Марс планетаһында аҙағынаса капитализм төҙөлөп бөткән, шуға унда йәшәйеш тә бөткән", - тип яуап бирел көлдөрҙө. Көлөрһөң дә: егерме йыл капитализм төҙөйбөҙ, ошо осорҙа әллә күпме матур һүҙҙәр һөйләнде, вәғәҙәләр бирелде, ә алға китеш юҡ. Эш хаҡы өҫтәлде, телефондан һөйләшеү арзанайҙы, тормош-көнкүреш яҡшырҙы, тип уҡығы һәм шуны тойғо килә лә бит. Белгестәр, үҙгәртеп ҡороу осоронда илебеҙҙең иҡтисады ярты быуатҡа артҡа ташланды, тип хәбәр итә...

Яһалма лозунгтар менән йәшәнек, улар әле лә бар инде ул. Иҫемдә, Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуға 30 йыл тулыуҙы байрам иткән йылдарҙа ГДР менән Башҡортостан дуҫ республикалар тип иғлан ителде. Хатта Өфөлә бер урамды "Галле округы урамы" тип тә атанылар. Дуҫлыҡ хөрмәтенә Башҡортостан Яҙыусылар союзынан бер төркөм делегация йыйҙылар. Шул саҡ бер яҙыусы: "Ни өсөн нәҡ башҡорттар унда барып дуҫлашып йөрөргә тейеш?" - тип һорарға баҙнат иткән. Ә етәкселәр: "Һуғыш ялҡыны Белоруссия, Украина ерҙәрен яндырып, көйҙөрөп үткән, ә Башҡортостан тыл булған бит", - тип аңлатма биргән. Яҙыусылар союзы делегаттары ГДР-ға барып ҡайтҡас, ул ерҙә тыуған шиғырҙарын радио аша уҡыны. Әнғәм Атнабаевтың бер шиғыры иҫемдә. Ул: "Карт немецты күреп:

"Эй, немец бабай,
Быуындарҙан быуындарға
Дружить итәйек давай!.." -

тип яҙһам да, башымда: "Минең атайымды һин үлтерҙеңме?" - тигән һорау ҡалҡа ла сыға", - тип өҫтәп ҡуйҙы. Һуңынан уға цензуранан ныҡ эләккән тинеләр. Эйе, уйларға мөмкин, ләкин әйтергә ярамай. Бына шулай, әйтергә ярамай, тип өндәшмәгән, битараф булған өсөн дә тормош артҡа тәгәрәгәнен берәй заман аңлармы икән кешелек?..

**Айгөл АХУНОВА.**

*КЕМ АЛЫҠ!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**12 майҙан 21 майға саҡлы Бөтә Рәсәй гәзит-журналдарға яҙылыу декадаһы бара. Ошо осорҙа "Киске Өфө"гә лә бер аҙ арзаныраҡҡа яҙылыу мөмкинлеге бар:**
**50665 индекслыһы - 331 һум 20 тин,**
**50673 индекслыһы - 362 һум 40 тин.**

**Май айында гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә башҡорт телендәге 5 "Ҡөрьән -Кәрим" китабы вәғәҙә итәбеҙ.**

**Әйткәндәй,** кемде был бүләк ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен.

Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө** менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

• Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **270 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшнигә юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

• Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **210 һум**.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы менән Марат Муса улы Мөләкөв Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары итеп тәғәйенләнде.

✔БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары "Башҡортостанда йәмәғәт тәртибен һаҡлау тураһында" закон проектын хупланы. Проектта ҡаралғанса, эскән килеш саңғыла шыуыу, сноуборд һәм конькиҙа йөрөү тыйыла.Эттәрҙе урамда морондоҡһоҙ йөрөтөү, автомобиль юлдарына, футбол, хоккей майҙандарына сүп-сар ташлау, төндә тыныслыҡты боҙоу, йәмәғәт урындарында аҡсаға һәм ҡиммәтле әйберҙәргә ҡурҙәлек итеү, кешегә эт һөсләтеү ҙә йәмәғәт тәртибен боҙоу тип иҫәпләнә. Шулай уҡ ғаиләлә бер-береһенә ҡул күтәреүселәр ҙә административ яуаплылыҡҡа тартылыласаҡ.

✔Республика парламентында "Төнгө ваҡытта граждандарҙың тыныслығын һәм именлеген тәьмин итеү тураһында" закон проекты ла ҡарала.Ул ҡабул ителгән хәлдә, республика граждандары төндә йырлап, ҡысҡырып йөрөргә, музыка аҡыртырға, һыҙғырырға, пиротехника ҡулланырға, фатирында ремонт эштәре башҡарырға тейеш түгел. Төнгө ваҡыт эш көндәрендә 23 сәғәттән иртәнге 7-гәсә, байрам һәм ял көндәрендә 22 сәғәттән 9 сәғәткә тиклем тип билдәләнгән.

✔21 майҙан "Айыҡ ауыл" республика конкурсы сиктәрендә Себер федераль университеты профессоры Виктор Кривоногов ауыл-ҡасабаларҙа семинар үткәрәсәк. Сараны Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы, "Айыҡ Башҡортостан" төбәк ижтимағи хәрәкәте ойоштора. Семинар 21 майҙа Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылында, 22 майҙа -Баймаҡ районы Темәс һәм Хәйбулла районы Йәнтеш ауылдарында,23-өндә - Йылайыр, Иҫәнгол (Ейәнсура), Мораҡ (Күгәрсен) ауылдарында,24-ендә - Күмертау, Мәләүез ҡалаларында,Ермолаево ҡасабаһында (Көйөргәҙе),25-ендә -Федоровка һәм Стәрлебаш районадарында, 26-һында -Салауат, Ишембай ҡалаларында,Талбазы (Ауырғазы) ауылында, 27 майҙа Ғафури районының Сәйетбаба ауылында буласаҡ.

ПРЕЗИДЕНТ БЛОГЫНАН




**"БР Фәндәр академияһының дөйөм йыйылышынан ҡайттым. Күргәҙмәне ҡараным. Ҡыҙыҡлы эштәр, әммә, үкенескә күрә, күптәре ғәмәлдә тормошҡа ашмай. Шулай уҡ ҡыҙыҡлы китаптар, монографиялар, әммә аҙ тираж менән баҫылғандар. Бер үк бәлә - аныҡ ғәмәлгә индерелгән ҡаҙаныштар аҙ. Әлбиттә, академия тикшеренеүҙәренең 100 процентын да тормошҡа ашыра алмай. Күп эштәр киләсәкте хәстәрләп эшләнә, тикшеренеү характерын ала. Әммә тормошҡа ашырылған хеҙмәттәр процентының ҙур булыуын күргө килә. Һәм ҡабат инновациялар, яңы эштәрҙең сәнәғәттә үҙләштерелеүе темаһына әйләнеп ҡайтабыҙ. Был барлыҡ тармаҡтарға ла ҡағыла: машиналар эшләү, нефть эшкәртеү, ауыл хужалығы, химия, медицина һәм башҡалар. Бынан тыш, йәмғиәтте берләштергән, халыҡҡа эш һәм эш хаҡы биргән ҙур идеялар, ҙур проекттар кәрәк. Ҙур проекттар эргәһендә мотлаҡ бәләкәй эшҡыуарлыҡ үҫешәсәк. Республикала нефть кластеры шундай масштаблы эшмәкәрлек йүнәлешенең береһе була ала. Быны нисек эшләүҙе уйларға, фекер алышыуға белгестәрҙе саҡырырға кәрәк. Кластер буйынса түбәндәге картина ҡуҙаллана: Салауат, Стәрлетамаҡ, Мәләүез - газ химияһы, Өфө, Благовещенск - нефть эшкәртеү һәм полиэфир комплексы, Октябрьский, Туймазы - нефть разведкаһы, нефть табыуҙың яңы технологиялары, башҡорт Урал аръяғы - тау мәғдәне сәнәғәте, Белорет - металлургия комплексы, төньяҡ-көнсығыш - ауыл хужалығы, урман, гидроэнергетика. Ҡыҙыҡлы картина килеп сыға". Президент блогындағы сираттағы фекер алышыу фән темаһына арналды. Унда фәнгә ҡыҫылышы булғандар ҙа, булмағандар ҙа, ҡасандыр фән менән шөғөлләнеп, артабан икенсе юлды һайлағандар ҙа үҙ ҡарашын белдерҙе. Әлегә фекерҙәр менән танышып, һығымтаны һуңыраҡ яһарбыҙ.**

# ҮҘ ФӘНЕБЕҘҘЕ АШАТЫУҘАН БАШ ТАРТҺАҠ...

## сит фәнде ашатасаҡбыҙ

**nissan93.** Был кластер республикаға яңы һулыш өрәсәк! Инвестициялар ағасаҡ! Эшҡыуарлыҡ үҫешәсәк, Татарстан менән бәйләнештәр, мөнәсәбәттәр яҡыная-саҡ. Ә бына ғалимдарҙа һеҙ яңылышаһығыҙ... Йәштәр ҙә етерлек, әммә республикала перспектива ҙур түгел. Шуға күрә улар Фәндәр академияһында эшләүгә ҡарағанда, репетиторлыҡ менән күберәк аҡса эшләй. Нефть кластеры өсөн ӨДНТУ-ла кадрҙар етерлек, уларҙы, тәү сиратта һәм үкенескә күрә, Башҡортостанда булмаған эрерәк предприятиелар ала. Идара итеүселәрҙе амбициялы йәштәр араһынан һайларға кәрәк... Барлыҡ кадрҙарҙы ла республика үҙ халҡы араһынан таба ала.

**Andreosh.** 80-се йылдарҙа конструкторлыҡ бюроһында эшләгәндә, бер кемгә лә бер нәмә лә кәрәкмәй, тигән тойғо ҡалғайны. Хатта мәңгелек двигатель уйлап тапһаң да, был бер кемде лә ҡыҙыҡһындырмаясаҡ. Аныҡ фән фәнни диспуттарҙан башлана, уларҙа перспективалы идеялар тыуа. Талиптарҙың әүҙемлеге лә юғары түгел, әйтерһең, улар дипломды һатып алырға (рефераттарҙы интернеттан күсереп алып) ғына килә, ә белем алырға түгел. Дөрөҫ ойошторолған диспут фәндә дәғүәселек тыуҙыра. Миненсә, ғилми учреждениелар төрлө тематика буйынса фәнни диспуттар ойошторорға тейеш. Унда теләгән кеше килә алһын, шулай уҡ халыҡ өсөн дә лекциялар ойоштороу кәрәк. Элегерәк бындай эш исем өсөн булһа ла уҙғарыла торғайны. Мин үҙем "Знание" йәмғиәтендә лектор булдым. 90-сы йылдарҙа аң культтын аҡса культы баҫып китте. Бары тик фәнни диспуттарҙа ғына ғилми хәйләкәрлекте аныҡ ғилми идеяларҙан айырырға мөмкин.

**popodko_dv.** Әйҙәгеҙ, донъя тәжрибәһендә нефть тармағын үҫтереүҙең дәүләт заказын билдәләйек һәм ғалимдар алдына бурыс ҡуяйыҡ. Дәүләт заказы глобаль булыуы мөмкин һәм барлыҡ ғалимдарға бик күп йылдарға етер. Беҙҙә институттар күп, уларҙың күпселеге Рәсәй ФА-на ҡарай. Фән гранитын кимерер өсөн идея барлыҡҡа килер. Юҡһа, бәләкәй һәм урта инвестпроекттар донъяны күсәренән әйләндереп ҡуйыр бөйөк кешеләрҙән бер телем икмәк өсөн һуғышыусы ваҡсыл кешеләр яһай. Ә ғалим ваҡсыллыҡтан азат булырға тейеш. Мәҫәлән, Перельман нимә ти: "Нимәгә миңә һеҙҙең миллиондарығыҙ, мин йыһан менән нисек идара итергә беләм". Һәр ғалим үҙе һәм коллегалары тураһында шулай уйлай. Әлбиттә, хеҙмәтең өсөн түләү ҙә булырға тейеш. Әммә беҙ уларға йыһан менән идара итеү урынына аҡса эшләй белгән егеттәрҙең ҡурайына бейергә тәҡдим итәбеҙ.

Дәүләт заказын РФ Фәндәр академияһына бирегеҙ. Уның етәксеһе менән һөйләшегеҙ. Был башҡа субъекттар өсөн тиңһеҙ өлгө. Дәүләт заказы өсөн ҡайҙан аҡса алырға? РФА менән берлектә халыҡ-ара баҙарҙы өйрәнегеҙ, фулеренттар, нанотехнологиялар, робототехника һ.б. Тәү сиратта халыҡ-ара институттарҙың заказын үтәгеҙ. Уларҙың сит илдә эшләгән беҙҙең ғалимдарҙың хеҙмәтенә түләргә аҡсаһы бар. Әгәр беҙ уларҙың мәсьәләһен хәл итеүгә тотош институттарҙы тәҡдим итһәк, аҡса эшләйәсәкбеҙ. Ғалимдарҙы айырым инвестпроекттарға бирергә ярамай. Ғалимдар - дәүләт нигеҙе. Әйҙәгеҙ, алға барайыҡ. Кемгә инвест сиселеш кәрәк, улар күптән инде шәхси лабораторияға эйә булып бөткән.

**Fganiev.** Исемлекте тулыландырғы килә: көньяҡ-көнсығыш - ҡымыҙ менән дауалау. Күптән түгел генә "Ҡымыҙ иләндә" тигән открыткалар алдым. Ҡымыҙ менән дауалау Дәүләкәндә, Шафранда, Бәләбәйҙә бик популяр булған. Беҙҙең ҡымыҙ менән дауалау шифаханаларының бренды Чехов, Аксаков, Толстой арҡаһында һаман да йәшәй. Былар барыһы ла ҡайҙа булды? Ошо шөғөл менән шөғөлләнгәндәрҙең ейәндәре ҡайҙа? Әйҙәрендә ҡымыҙ яһаусы шәхси кешеләр бар. Ә ниңә уны ҡабаттан тергеҙмәҫкә?

**ilya_72.** Проекттар күп, әммә улар республикаға эшләмәй. Йәйһә ҡайҙалыр туҙанға батып яталар. Иң аяныслыһы, күп идеялар, асыштар, уйлап табыуҙар патентланған һәм бөтөн донъяла бына тигән эшләй, тик беҙҙә түгел. Миҫалға Японияны ғына алайыҡ. Һуғыштан һуңғы емереклектәрҙән һуң ике тиҫтә йыл үтҡәс, ул ситтән индерелгән технологияларҙа иҡтисадын һиҙелерлек күтәрҙе. Улар сит белемде үҙҙәренең файҙаһына ҡулланды. Беҙҙә бөтөн нәмә киреһенсә. Быны менән кем шөғөлләнергә тейеш? Ярым ас, үҙ-үҙенә ышанмаған халыҡмы? Миненсә, дәүләт иҡтисади үҫештең аныҡ йүнәлешен билдәләргә һәм уны тормошҡа ашырғанда эшһөйәр, ныҡышмал, маҡсатҡа ынтылыусы, хеҙмәте тейешенсә баһаланған кешеләргә таянырға тейеш.

**batyrsha1.** Көнбайыш эшҡыуарҙарының кемеһелер, кешелек алдында яһалған иң ҙур иҡтисади енәйәт - ул тормошҡа ашырылмаған идея, тигән. Аҙым һайын енәйәт яһарға кәрәкме икән? Фәнни тикшеренеүҙән ыңғай һөҙөмтә биргәндә, улар 100 процентҡа тормошҡа ашырылырға тейеш. Был осраҡта "мөмкинлек юҡ" тигән аҡланыуҙың булыуы ла мөмкин түгел. Һәм тағы. Аҙыраҡ сығымдар менән ауыл хужалығында биоэнергетиканы үҫтереү яҡшыраҡ түгелме? Унда биодизель дә, биогаз да, ауыл ерендә инфраструктураны үҫтереү ҙә буласаҡ. Шуға ярашлы, ауыл халҡының тормош кимәле күтәреләсәк, ауыл хужалығы продукцияһының үҙкиммәте төшәсәк. Быны тиҙ арала, ерҙе нимә менәндер эшкәртергә, уны эшкәртеүсе булғанда башҡарып ҡалырға кәрәк.

**mironenkova_zh.** Әлеге ваҡытта фән фәнни эштәрҙә ихтыяжға бәйле нимәнелер ҙур күләмдә тәҡдим итә алмай. Дәүләт яйлап фәндән айырылды һәм уны күпселек осраҡта эшҡыуарлыҡ финанслай. Әммә эшҡыуарлыҡты яҡшы һәм тиҙ килем ҡыҙыҡһындыра. Илгә һәм халыҡҡа файҙалы булырлыҡ, әммә килемһеҙ эштәр эшҡыуарлыҡҡа ҡыҙыҡлы түгел. Шуға ла ундайҙар көштәләрҙә туҙанланып ята. Фундаменталь фән - айырым тема. Бөгөн беҙ уҙған быуаттың 50-70-се йылдарындағы фундаменталь эштәрҙең ҡалдығын тормошҡа ашырабыҙ. Әгәр дәүләт тотош фәнгә ҡарашын үҙгәртмәһә, аҙ ғына ҡулланылышҡа индерергә лә бер нәмә ҡалмаясаҡ. Билдәле: "Әгәр үҙ армиябыҙҙы ашатыуҙан баш тартһаҡ, ситтәрҙекен ашатасаҡбыҙ", тигән фразаны үҙгәртеп: "Әгәр үҙ фәнебеҙҙе ашатыуҙан баш тартһаҡ, сит фәнде ашатасаҡбыҙ", - тиергә мөмкин. Эштәрҙе һатып алырға тура киләсәк. Дөрөҫ, был илгә лә, халыҡҡа ла ҡиммәткәрәк төшәсәк. Был мәғарифҡа ла ҡағыла. Әгәр бөгөн Рәсәйҙә халыҡтың 30 проценты Ҡояш Ер тирәләй әйләнә, тип һанай икән, фәндә ниндәй үҫеш көтөргә мөмкин? Ә бит бынан 20 йыл элек кенә беҙ донъяла иң уҡыған халыҡ була торғайныҡ.

**Ғәли Вәлиев.** Ғәмәлдә 1991 йылда ойошторолған БР ФА-ның маҡсаты идеологик ине. Айырым башҡорт математикаһы, биологияһы, химияһы була алмай, әммә башҡорт халыҡ педагогикаһы, медицинаһы, мәҙәниәте, фәлсәфәһе, әҙәбиәте, сәнғәте, сәйәсәте, тарихы бар. Тимәк, БР ФА-һы Фәнни хәҡиҡәт министрлығының идеологик ролен үтәй. Ә уның маҡсаты булып сәйәси элитаның үҙгәреүенә ҡарамаҫтан, ғәмәлдәге режимды фәнни яҡтан нигеҙләү буласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ирекһеҙҙән, ҡасандыр илебеҙ уҡыусыларының, тимәк, киләсәгебеҙҙең донъяла интеллект буйынса беренсе урында тороуы, хәҙер инде аҫҡа тәгәрәүе тураһындағы факт хәтергә төшә. Шулай уҡ донъя буйынса - Рәсәй, Рәсәй буйынса Башҡортостан иң уҡымышлы дәүләт тип маҡтанабыҙ. Ә күңелде бер һорау тырнай: "Әгәр һеҙ шул тиклем аҡыллы икәнһегеҙ, ни өсөн һеҙ ярлы?". Ысынлап уйлап ҡараһаң, ни өсөн? Бәлки, теүәл фәндәргә иғтибарҙы кәметеп, күпләп гуманитарийҙар әҙерләүҙәр сәбәбе? Әлбиттә, рухи нигеҙһеҙ, милли идеологияһыҙ йәшәп булмай. Ләкин рухият менән иҡтисад араһында баланс булыуы күпкә уңышлыраҡ.**

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Владимир Путин кисекмәҫтән Бөтә Рәсәй халыҡ фронтының төбәк бүлексәләрен ойошторорға ҡушты. Уның белдереүенсә,"Берҙәм Рәсәй"ҙән РФ Дәүләт Думаһына депутатлыҡҡа кандидаттар һайлап алыуҙа партия ағзалары йә уның яҡлылар ғына түгел, ә профсоюз, ҡатын-ҡыҙҙар, йәштәр, һ.б. ойошмалар ағзалары ла ҡатнашырға тейеш. Бөтә Рәсәй халыҡ фронты илде модернизациялауҙың көнүҙәк мәсьәләләрен хәл итеүгә ҡушылырға әҙер торған ижтимағи һәм сәйәси көстәрҙең, ил граждандарының берләшеүен тәьмин итәсәк.

✔Хәйбулла районы үҙәгендә "Айыҡ Хәйбулла" йәштәр форумы булып үтте. Уны Хәйбулла район хакимиәте, "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт хәрәкәте, хәйбуллаларҙың Өфөләге яҡташтар ойошмаһы ойошторҙо. Форум сиктәрендә алкоголдең зыяны тураһында лекция уҡылды, видеороликтар күрһәтелде. Шулай уҡ "Айыҡ Хәйбулла" йәмәғәт ойошмаһы ойошторолдо.

✔Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһен реформалауға булышлыҡ итеүсе фонд авария хәлендәге йорттарҙан күсерелеүсе граждандарға финанс ярҙамы күрһәтәсәк. Был ярҙам 705 млн һумды тәшкил итәсәк. Был маҡсатта шулай уҡ республика бюджетынан 128,6 млн, муниципаль берләшмәләрҙән 128,6 млн һум бүленәсәк. Быйыл адреслы программала туғыҙ муниципаль берләшмә - Өфө, Күмертау, Нефтекама, Октябрьский, Сибай, Стәрлетамаҡ, Мәләүез, Туймазы һәм Яңауыл ҡатнаша.

✔БР Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы 2011 йылға күп фатирлы йорттарҙы ремонтлау буйынса адреслы программаға индерелгән йорттар исемлеген баҫтырып сығарҙы. Исемлектә барлығы 75 йорт. Шуларҙың 39-ы баш ҡалала. Ҡалғандары Күмертауҙа, Дүртөйләлә, Октябрьскийҙа, Бөрәлә, Благовещенда, Туймазыла.

✔БР Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуҡын яҡлау буйынса дәүләт комитеты алып барған көндәлек мониторинг буйынса апрелдә социаль әһәмиәтле 11 төр аҙыҡ-түлеккә хаҡ 0,2-нән 3,3 процентҡа тиклем кәмегән. Ул исемлектә шәкәр, һөт, картуф, тауыҡ ите, он, май, дөгө, һыйыр һәм сусҡа ите бар. Ә һуғанға, бойҙай икмәгенә, тары, ҡарабойҙай ярмаларына, кәбестә, кишергә хаҡ артҡан.

✓ *Тикшереүҙәр асыҡлауынса, бөтә донъяға билдәле Башҡортостан ипподромының үҙенең бер (!) аты ла юҡ, барлыҡ аттар ҙа шәхси хужаларҙыҡы, ә ипподром уларға бары тик ҡуртымға бүлмәләр генә бирә.*



*Аһ-Аһ!*

**Башҡортостан Республикаһының Контроль-иҫәп палатаһында коллегия ултырышы үтте. Көн тәртибенә Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығына 2009-2010 йылдарҙа республика бюджетынан бүленгән 2 миллиард 700 миллион һум аҡсаны һәм дәүләт милкен дөрөҫ ҡулланыуҙы тикшереү һөҙөмтәләре сығарылды.**

# "АҠБУҘАТ" ИППОДРОМЫНЫҢ...

## бер аты ла юҡ, имеш

Комиссия тикшереүҙәре асыҡлаған тәртип боҙоуҙар башлыса бюджет һәм бюджеттан тыш аҡсаларҙы һөҙөмтәһеҙ, маҡсатһыҙ һәм нигеҙһеҙ ҡулланыуға ҡайтып ҡала. Айырыуса ҙур һорау тыуҙырған тармаҡ - "Аҡбуҙат" ипподромы. Тикшереүҙәр асыҡлауынса, бөтә донъяға билдәле Башҡортостан ипподромының үҙенең бер (!) аты ла юҡ, барлыҡ аттар ҙа шәхси хужаларҙыҡы, ә ипподром уларға бары тик ҡуртымға бүлмәләр генә бирә. Был, үҙ сиратында, алып барылған эшмәкәрлек дәүләт реестрында теркәлгән исемгә -"Аҡбуҙат" ипподромы дәүләт унитар предприятиеһы - тура килмәү сәбәпле, банкрот тип иғлан ителеп, уның бөтөрөлөүенә лә килтереүе мөмкин. Шулай уҡ "Аҡбуҙат" ипподромы бинаһы 2007 йылда күп етешһеҙлектәр менән ҡулланыуға ҡабул ителгән һәм әлегәсә төҙәтелмәгән. Стеналарҙа һәм ареналарҙа сатнаған урындар күп, ә ипподромға күпләп халыҡ йыйылыуын иҫәпкә алғанда, был сатнауҙарҙың ниндәй эҙемтәләргә килтереү мөмкинлеген күҙаллауы ауыр түгел. Ипподромдың мансардаһы һәм ат аҙбары булырға тейешле бинаһы ятаҡ итеп үҙгәртелгән һәм ипподром хеҙмәткәрҙәренә һәм сит кешеләргә ҡуртымға бирелгән.

Министрлыҡҡа йөкмәтелгән "Йәштәрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү" программаһының да тейешле кимәлдә башҡарылмауы билдәләнде. 2011 йылдың 15 ғинуарына Программала ҡатнашырға теләк белдереп 23 мең йәш ғаилә ғариза яҙған. Үткәрелгән анализ күрһәтеүенсә, әлеге көндә алып барылған финанслау темпы менән был ғаиләләргә үҙ торлаҡтарын 20 йылдан ашыу көтөргә кәрәк буласаҡ. Шул уҡ ваҡытта министрлыҡ иҫәбендә йыл да субсидиялар өсөн бүленгән аҡсаның артып ҡалыуы һәм федераль бюджетҡа кире ҡайтарылыуы күҙәтелә. Шулай уҡ ҡайһы бер муниципаль райондарҙа Программала ҡатнашыусыларҙы теркәү һәм иҫәпләү Китабында ла тәртип боҙоуҙар асыҡланған. Улар күпләп төҙәтеүҙәргә, иҫәпкә ҡуйыу сиратын боҙоуға ҡайтып ҡала. Шулай уҡ иҫәпкә ҡуйылырға тейеш булмаған йәш ғаиләләрҙең дә сиратҡа әлегеүе һәм министрлыҡҡа ебәрелгән электрон вариант исемлектең район етәксеһе раҫлаған исемлек менән тап килмәү осраҡтары ла теркәлгән.

Асыҡланған барлыҡ етешһеҙлектәр ҙә ҙур тәртип боҙоуҙар тип билдәләнде һәм министрлыҡҡа ҡыҫҡа ваҡыт эсендә уларҙы төҙәтеү бурысы ҡуйылды. Ә беҙҙә шундай һорау ҡалды: хаталарҙы төҙәтә белгән кеше хата яһамай. Тимәк...

**Гөлназ САФУАНОВА.**

*ЙҮНСЕЛ ЙҮНЕН ТАБЫР*

# ЭШҠЫУАРЛЫҠ - КӨРӘШ МАЙҘАНЫ,

## унда бары тик таһылдар, сәмселдәр еңеү яулай

**Йәмғиәттә эшҡыуарҙарға тәғәйен юл ярыуы анһат түгел. Бер яҡтан, урындағы власть яғынан һәр кемгә лә тигеҙ, йәғни ғәҙел ҡараш етешмәүе, икенсе яҡтан, субсидия, кредит алыуҙағы ҡатмарлыҡтар яңы эш башлаусылар өсөн генә түгел, шаҡтай тәжрибә туплаған бизнес вәкилдәре өсөн дә төп ауырлыҡ булып тора. Икенсе төрлө әйткәндә, эшҡыуарлыҡ - көрәш майҙаны кеүек, унда бары тик көслө рухлы, таһыллы, ныҡыш кешеләр генә үҙ эшен атҡарып сыға ала.**

Хәйбулла районы үҙәге Аҡъяр ауылында булып үткән эшҡыуарҙар ҡоронда башҡорт эшҡыуарлығын борсоған иң ҡырҡыу мәсьәләләр күтәрелде. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Иҡтисад, эшҡыуарлыҡ һәм ер сәйәсәте буйынса комиссияһы тарафынан ойошторолған күсмә семинар-кәңәшмәлә күрше Ейәнсура, Йылайыр райондары эшҡыуарҙарының да ҡатнашыуы йыйынға мәртәбә өҫтәне.

Хәйбуллала эшҡыуарлыҡ өлкәһендә хәлдәр нисек һуң? Статистика мәғлүмәттәре күрһәтеүенсә, районда йәмғеһе 772 шәхси эшҡыуар, 112 юридик берәмек, 110 крәҫтиән-фермер хужалығы (артабан - КФХ ) иҫәпләнә. (Сағыштырыу өсөн: Ейәнсурала 519 шәхси эшҡыуар, 145 юридик берәмек, 83 КФХ бар; Йылайыр районында иһә был күрһәткестәр 257, 50, 140 тәшкил итә). "Ҡағыҙҙа барыһы ла ал да гөл кеүек. Ләкин районда һуңғы йылдарҙа эшҡыуарлыҡ, көслө баҫым аҫтында йәшәп, артыҡ үҫешә алманы", - тигәйне телефон аша алдан һөйләшкән ваҡытта хакимиәт башлығының беренсе урынбаҫары Раил Ибраһимов. Ә хәҙер, районда власть алмашынғас, хәлдәр ыңғай яҡҡа үҙгәргәнме һуң? Бер нисә эшҡыуарҙың объекттарына барып, уларҙың эше, тәжрибәһе менән танышып сығыу бындағы дөйөм күренеште күҙ алдына баҫтырыу мөмкинлеге бирҙе. Беҙ танышып сыҡҡан тимер әйберҙәр яһау һәм машиналар йүнәтеү йүнәлешендә эшләүсе предприятие, шиномонтаж, мебель цехтары, шәхси магазиндар һәм кафе һәйбәт кенә тәьҫораттар ҡалдырһа ла, күңелдә барыбер төйөн ҡалғандай булды. Һөйләшеү барышында кемдәрҙер үҙҙәренә, нимһәйәт, "йәшел ут" ҡабыныуына ҡыуаныс белдерһә, икенселәр эшҡыуарлыҡ даирәһендә артыҡ үҙгәреш булмауға ишара яһаны.

Комиссия рәйесе Иршат Аҫылғужин алып барған эшҡыуарҙар ҡоро, һәр ваҡыттағыса, асыҡтан-асыҡ һөйләшеүгә, йәнле диалогҡа ҡоролдо. Хакимиәт башлығы урынбаҫары Раил Ибраһимов районындағы бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡтың торошо менән таныштырып үтте һәм айырым проблемаларҙы бәйән итте. "Иң насары, - тине ул, - эшҡыуарҙар араһында миләттәштәребеҙҙең күп булмауы. Булғандары ла башлыса алып һатыу менән шөғөлләнә, ә етештереү тармағында эшләүселәр бөтөнләй аҙ". Раил Хажморат улының был һүҙҙәре менән килешмәү мөмкин түгел. Ысынлап та, төҙөлөш, ремонт эштәре, халыҡтан һөт, ит йыйып эшкәртеү менән шөғөлләнергә нимә ҡамасаулай? Ә элекке колхоз-совхоз етәкселәре, тәжрибәле зоотехниктар, агрономдар, инженерҙар, бригадирҙар нимә эшләп ята? Исмаһам, ниңә улар крәҫтиән-фермер хужалыҡтары ойоштороп йәки бәләкәй предприятиелар асып ебәрмәй? Раил Хажморат улы әйтмешләй, совет заманы, йәғни элекке система кире ҡайтмаясаҡ бит. Алма беш, ауыҙыма төш, тип өйҙә күпме ҡул ҡаушырып ултырырға мөмкин!

Эйе, һорауҙар бихисап. Әммә үҙҙәренең фиҙаҡәр эше, ыңғай тәжрибәһе менән был һорауҙарға тулы яуап биргән кешеләр ҙә юҡ түгел милләттәштәребеҙ араһында. Шуларҙың береһе - Йылайыр районы уҙаманы, ауыл Советы депутаты, крәҫтиән-фермер хужалығы башлығы Морат Иҫәндәүләтов. 20 йыл буйы фермер булып эшләп, ул үҙен ысын ер хужаһы итеп танытҡан. "Әлбиттә, баштараҡ ауырлыҡтар булды, ләкин мин бирешмәнем, - тине ул, ҡорҙа ҡатнашыусыларҙы үҙ тәжрибәһе менән таныштырып. - Ер - беҙҙең төп байлығыбыҙ. Тик мине шуныһы борсой: күптәр ер пайҙарын бушҡа ғына теләһә кемгә биреп бөтәсәк. Ваучерҙар менән хәл нисек

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ҺОРАУҘАР КҮТӘРЕЛӘ,

## төплөрәк тикшерелһен дә ине

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың Мәғариф, фән, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр эштәре буйынса комитеты республикала мәҙәниәт өлкәһендәге ҡануниәтте үҫтереү перспективалары хаҡында фекер алышыу өсөн түңәрәк ҡор ойоштороҙо.**

Тәүҙә, әлбиттә, республикала мәҙәниәткә һәм сәнғәткә ҙур иғтибар бүленеүе, Хөкүмәтебеҙҙең был өлкәне үҫтереү юҫығындағы саралары, социаль-иҡтисади, хоҡуҡи шарттар менән тәьмин итеүе тураһында билдәләп үтелде. Сығыш яһаусылар ҡаҙаныштар менән бергә хәл итәһе проблемаларҙы ла әйтеп китте. Мәҫәлән, күптәр билдәләүенсә, бөгөнгө көндә республиканың бәләкәй ҡала һәм ауылдары мәҙәниәт усаҡтарының матди базаһы яңыртыуҙы талап итә. Мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы йәшәү минимумынынан аҙ генә күберәк, шуға күрә уҡыу йорттарын тамамлаған йәш белгестәр үҙ һөнәре буйынса эшкә урынлашмай. Ауыл мәҙәниәт йорто директорҙары һәм клуб мөдирҙәре эшенә ҡағылышлы мәсьәлә лә телгә алынды. Бөгөнгө көндә уларҙың эше, күпселектә, ара-тирә мәҙәни саралар, байрам кисәләре үткәреүгә, шәмбе һәм байрам көндәрендә йәштәр өсөн клуб ишеген асып, музыка ҡуйыуға ғына ҡайтып ҡала башланы, ә улар, беренсе сиратта, ауылдың мәҙәни кимәлен үҫтереүселәр, хатта тәрбиәселәр булып торорға тейеш.

Түңәрәк ҡорҙа мөһим мәсьәләләр ҡаралды, көнүҙәк проблемалар күтәрелде, тик бер һорау ҙа төпкә төшөп тикшерелмәне. Үҙ фекерен тулыраҡ әйтергә укталғандар регламент ҡыҫымы аҫтында ҡалды. Ә йәл...

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА.**

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Былтыр Өфө бюджетынан мәғариф системаһына 5,5 млрд һум аҡса күсерелгән. Ә бына милли хәүефһеҙлек һәм хоҡуҡ һаҡлау эшмәкәрлеге өсөн 503 млн һум тотонолған. Был хаҡта ҡала бюджеты тотоноуҙары тураһындағы парламент тыңлауҙарында хәбәр ителде. Шулай итеп, мәғариф баш ҡала бюджетының 35 процентын "ашаған" булып сыға. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ тармағы өсөн 3,9 млрд һум киткән. Ә һаулыҡ һаҡлау, физик культура һәм спорт өсөн баш ҡала 2,8 млрд һум, мәҙәниәт, кинематография һәм киң мәғлүмәт саралары өсөн 286 млн һум тотонған. Былтыр Өфө бюджетының килемдәр өлөшө - 15,9 млрд һум, сығымдар өлөшө 15,5 млрд һум тәшкил иткән.

✓17-18 майҙа "Динамо" стадионында Башҡортостандың мосолман йәштәре араһында мини-футбол буйынса чемпионат үтә. Уны Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты ойоштора.

✓Баш ҡаланың Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәгенән хәбәр итеүҙәренсә, әле Өфөлә 10 меңдән ашыу эшһеҙ иҫәпләнә, шул уҡ ваҡытта 13 меңлән вакант урын тәҡдим ителә. 500-ләп эшһеҙ хеҙмәт баҙарында ҡытлыҡ кисерелгән һөнәрҙәргә уҡый. Ундай һөнәрҙәр араһында страховка агенты, аудит белемле бухгалтер, маркетинг һәм тәьминәт буйынса менеджер, персонал буйынса менеджер, визажист, водитель, кейем бесеүсе, тегенсе, түбә ябыусы, биҙәү эштәре буйынса оҫталар, официант-бармен, ашнаҡсы-кондитер бар.

✓Медицина айнытҡыстары ябылғас, баш ҡала властары Өфөлә иҫерек хәлендәге кешеләр өсөн Социаль-реабилитация үҙәге асырға ҡарар иткәйне. Үҙәктең көньяҡ бүлексәһе быйылғы йыл башынан эшләй башлаһа, әле уның төньяҡ бүлексәһе асыласаҡ. Карл Маркс урамының 51/1 йортонда урынлашҡан көньяҡ бүлексә Дим, Киров, Ленин, Совет райондарын хеҙмәтләндерә. Ә Победа урамының 3-сө йортонда урынлашасаҡ төньяҡ бүлексә Октябрь, Орджоникидзе, Калинин райондары өсөн тәғәйенләнгән. Ул июлдә эшләй башлаясаҡ.

✓Башҡорт дәүләт университеты спорт комплексында Башҡортостан вуздары студенттарының "Бокс наркотиктарға ҡаршы" тигән универсиада үтә. Финал ярыштарын 14 майҙа ҡарарға мөмкин.

булып бөттө, ер мәсьәләһендә лә беҙҙе шул уҡ хәл көтә. Шуның өсөн беҙ эшҡыуарлыҡты ауыл хужалығы йүнәлешендә үҫтерергә тейешбеҙ. Инвесторҙарға һис тә өмөт бағларға ярамай. Уларҙы бары тик ҙур табыш ҡыҙыҡһындыра..."

Ысынлап та, бизнес өлкәһендә эш башлап ебәреү бары тик тырыштарҙың, сәмселдәрҙең генә ҡулынан килә. Морат Иҫәндәүләтов кеүек булдыҡлы егетте беҙ Аҡъярҙа ла күрҙек. Һүҙ үҙ көсө менән 2007 йылда мебель цехы асып ебәргән Илшат Игебаев тураһында бара. Кешенән бурысҡа аҡса алып тороп, ул башта ҡулдан "Газель" машинаһы һатып ала, артабан мебель цехы өсөн бина төҙөп ҡуя. Әлеге көндә бында дүрт кеше эшләп йөрөй, эш хаҡына зарланмайҙар. "Эшһеҙ ултырмайбыҙ. Ойошмалар ҙа, ябай халыҡ та төрлө заказдар биреп тора. Өҫтәл, ултырғыстан алып шкаф-купе, йоҡо бүлмәһе йыһаздарына тиклем - барыһын да эшләйбеҙ", - тип һөйләй Илшат Вәкил улы.

Тик хәҙер инде ныҡлап аяҡҡа баҫҡан, табыш алып эшләй башлаған бәләкәй предприятие хужаһының бөгөнгәсә дәүләттән бер тин ярҙам алмауы ғына аптыратты. Кемдер, иламаған балаға имсәк бирмәйҙәр, тиер. Әммә урындағы етәкселәрҙең бер нисә эш урыны булдырған, ярайһы уҡ суммала һалым түләгән, Пенсия фондына тейешле хаҡ индергән эшҡыуарға субсидия йәки кредит юллауҙа ярҙам итеп ебәрһә, һис тә насар булмаҫ ине. Ошо урында Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовтың быйылғы Мөрәжәғәтнамәһендә әйтелгән түбәндәге һүҙҙәргә иғтибарҙы йүнәлтергә була: "Әгәр муниципалитетта бизнес булмаһа, әгәр ул һалым түләмәһә һәм эш урындары булдырмаһа, был осраҡта район йәки ҡала фәҡирлектән сыға алмаясаҡ... Бизнес - улар өсөн берҙән-бер һәм төп ышанысл терәк".

Аҡъярҙа йәшәүсе Вәкил Күскилдин да, форсаттан файҙаланып, үҙенең аһзары менән уртаҡлашып алырға булды. Ул, элекке һөтсөлөк фермаһын һатып алып, бөгөн һарыҡсылыҡты үҫтереү өсөн ер мәсьәләһенә барып абынған булып сыҡты. Һөйләшеү барышында асыҡланыуынса, уның эшҡыуар улы, баҡтиһәң, ерҙе ҡуртымға алыҫтан түгел, ә яҡында ғына ятҡан халыҡтың сабынлығынан алырға теләй икән. Был осраҡта, әлбиттә, ике яҡты ла ҡәнәғәтләндерерлек алтын урталыҡты табырға кәрәк буласаҡ.

- Беҙгә тиҙ арала нимәләр эшләргә кәрәк, - тине Маҡандан килгән шәхси эшҡыуар Марат Татлыбаев. - Урал арьяғын комплекслы үҫтереү программаһын тормошҡа ашырыуҙа беҙ ҙә ҡатнашһаҡ ине. Был йәһәттән, минеңсә, оператив штаб төҙөп, саралар планы эшләргә кәрәк. Миллиардлаған һум аҡсаның бер өлөшө булһа ла беҙҙең яҡҡа килһә, насар булмаҫ, тимен.

Урал арьяғын үҫтереү программаһына эләгеп китеү юлдарын табыу, һәр йүнселгә (ул оҡшаймы-оҡшамаймы) артабан үҫеү өсөн тигеҙ шарттар булдырыу тураһындағы уй хәйбуллаларҙы ғына түгел, Йылайыр районы эшҡыуарҙарын да борсой. Мәҫәлән, Фәйзуллиндар ҙа ошо программаға ҡушылыу теләген белдерҙе. "Беҙҙең районда яңы етәкселегә эшҡыуарҙар менән эшләүгә ҙур иғтибар бүлә башланы, - тине улар. - Тиҙҙән хакимиәт ҡарамағында эшҡыуарҙар советын төҙөп ебәрергә ниәтләйбеҙ. Йүнселдәр бер төптән эш иткәндә генә нимәләргә өлгәшеп буласаҡ. Бөгөн беҙҙе айырыуса финанс мәсьәләһе борсой. Һәр эшҡыуар, беренсе сиратта, үҙ производствоһын үҫтерергә теләй, ә быының өсөн аҡса кәрәк. Банктар беҙҙән ҡурҡа. Дәүләттән тотҡарлыҡһыҙ субсидия, лизинг алыу - һәр эшҡыуарҙың хыялы".

Ауыл хужалығы йүнәлешендә эшләүселәр кредитты, әлбиттә, "Россельхозбанк"тан алырға теләй. "Ләкин дәүләт капиталы иҫәбенә асылған был банктан отошло шарттарҙа кредит алыу мөмкин түгел. Республика хөкүмәте был тәңгәлдә тейешле сара күрһә ине",- тине ҡорҙаға ҡатнашыусылар. Кредитһыҙ бер фермер ҙа, бер эшҡыуар ҙа ҡиммәтле ҡоралдар һатып ала, тимәк, продукция етештереүҙе лә арттыра алмай. Банктар хәҙер - быуа быуырлыҡ. Тик уларҙың барыһы ла кредит алыусы иҫәбенә байығыуҙы маҡсат итеп ҡуя. Был хәлдән нисек сығырға һуң? Күптәрҙе ҡыҙыҡһындырған был һорауға банк белгесе Алмаз Абдуллин яуап бирҙе һәм килеп тыуған шарттарҙа ислам ҡанундарына, партнерлыҡ принцибына таянып эш иткән банк төҙөү зарурлығын бәйән итте.

Фекер алышыу барышында эшҡыуарлыҡ өлкәһендәге айырым проблемаларҙы хәл итеү буйынса башҡа тәҡдимдәр ҙә яңғыраны. Әйтәйек, үҙ эшен асырға ниәт иткән кеше, субсидия алыу өсөн башта бизнес-план төҙөргә тейеш. Унда теге йәки был йүнәлештә алып барыласаҡ эшмәкәрлеге өсөн мотлаҡ үҙенең сығымдарын күрһәтергә тейеш. 25 процент күләмендәге был шарт һис тә дөрөҫ түгел, ул тиклем аҡса булһа, беҙ үҙ эшебеҙҙе дәүләт ярҙамынан тыш та башлап ебәрә алыр инек, тиеүселәр менән килешмәү мөмкин түгел. Башҡортостан Республикаһының Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты бәләкәй бизнесҡа аяҡ баҫырға теләк белдереүселәрҙең мәнфәғәтен яҡлар, "25 процент" кәртәһен кәметер йәки бөтөнләй алып ташлар, тип ышанғы килә.

Ғөмүмән, эшҡыуарҙар ҡоронда булдыҡлы бизнес вәкилдәренең үҙ тәжрибәһе менән ихлас уртаҡлашыуы йәш эшҡыуарҙар өсөн бик тә фәһемле булды. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты эргәһендәге Бизнес үҙәге етәкселегенең тос кәңәштәрен, эшлекле тәҡдимдәрен һәр кем йылы ҡабул итте.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Эшҡыуарлыҡтағы һәр аҙым, көрәш майҙанындағы кеүек, көс һалыуҙы, тир түгеүҙе талап итә. Был майҙанда, өҫтә әйтеүебеҙсә, бары тик таһылдар, сәмселдәр еңеү яулай. Милләттәштәребеҙ ошо ауыр ҙа, әммә кәрәкле лә майҙанда һис тә бил бирмәҫ, батыр булып танылыр, иншалла. Бахыр булып йәшәүҙән ҡотолорға ваҡыт.**

Нияз БУЛАТОВ.

# БАЛАЛАРҒА ҠУШЫЛЫП...

## тәбиғәт байрам итте

**Парктар маршы - халыҡ-ара тәбиғәтте һаҡлау акцияһы. Был сара йыл да айырым һаҡлау аҫтына алынған тәбиғәт территорияларында апрель айында уҙғарыла. Маҡсаты: тирә-яҡ мөхиттәге проблемаларға йәмғиәттең иғтибарын йүнәлтеү, уникаль тәбиғәт комплекстарын һәм объекттарының һаҡлауға мохтаж булыуы тураһында иҫкәртеү.**

Көньяҡ Урал дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы, ғәҙәттәгесә, парктар маршын юғары кимәлдә үткәрҙе. Мәктәп уҡыусыларының бәйге рәүешендә ойошторолған үҙенсәлекле байрамда күпләп ҡатнашыуы, әлбиттә, уларҙын тәбиғәтте һөйөүе һәм хәстәрләүе тураһында һөйләй.Беҙҙең хеҙмәткәрҙәргә балаларҙың тәбиғәт донъяһына арналған шиғыр-иншаларын, фотоһүрәттәрен, төрлө материалдарҙан эшләнгән ижад емештәрен баһалау еңелдән булманы. Уларҙың һәр береһенең нигеҙендә, ысынлап та, тәрән фәлсәфә барлығына шаһит булындың.

Әйткәндәй, парктар маршы Белорет районында ике төп зонала үтте. Инйәр биләмәһенән әүҙемдәр рәтендә Межгорье ҡалаһының 2-се , 3-сө, Инйәрҙең 2-се һәм Йөйәк, Берештамаҡ, Асы мәктәптәре булды. Ә инде Сермән зонаһынан иң-индәр баҫҡыстарында Абҙаҡ, Сермән, Үҙән һәм Ломовка белем усаҡтары билдәләнде. Еңеүселәр ҡурсаулыҡ әҙерләгән грамота һәм бүләктәр алып ҡыуанды. Тәбиғәт өсөн янып йәшәүсе, ижад емештәрен йәшел мөхиткә бағышлаған балаларҙы БР Тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министрлығы бүләкләне. Улар араһында Инйәрҙең 1-се мәктәбе уҡыусыһы Әлиә Ғиззәтуллина менән 2-се мәктәп уҡыусыһы Алһыу Солтанова ла булды. Бөйөк рус яҙыусыһы Антон Павлович Чеховтың "Урмандар кешене матурлыҡты тойорға һәм аңларға өйрәтә" тигәнен яҡшы үҙләштергән балалар инде былар.

Марат БӘХТИЙӘРОВ,
Көньяҡ Урал дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы белгесе.

ҺОРАУ - ЯУАП

# БЕРҘӘМ БИЛЕТТАН ФАЙҘАЛАН

**Мин хеҙмәт ветераны, III төркөм инвалид, репрессияға дусар ителдем. Йыл аҙағында телевизорҙан, бөтә төркөм инвалидтарҙың да йәмәғәт транспортында бушлай йөрөргә хоҡуғы бар, тип әйткәндәрен ишеттем, ләкин социаль бүлектә был хаҡта белмәйбеҙ, тинеләр.**

- Федераль һәм төбәк закондарына ярашлы, льготаға эйә граждандарға транспортта бушлай йөрөү буйынса социаль ярҙам саралары ҡаралмаған, ләкин БР Хөкүмәте тарафынан 2005 йылдың 28 ғинуарында социаль ярҙам саралары (федераль бюджеттан) менән файҙаланыусы айырым граждандар өсөн берҙәм социаль юл йөрөү билеты (ЕСПБ) һатып алыу тәртибе раҫлангайны. Был билеттар трамвайҙа, троллейбуста, ҡала һәм ҡала яны маршруты автобустарында, ҡала маршрутындағы эске һыу транспортында ғәмәлгә ярарлыҡ. 2010 йылдың 1 апреленән бындай билет хаҡы айына 400 һум. Ул электричкала йөрөү хоҡуғы бирмәй. 2007 йылдың 1 июленән төбәк льготниктары өсөн электричкала йөрөүҙә майҙан алып сентябргә тиклем 50 процент ташлама яһалды. Соцпакеттан йә булмаһа уның транспорт өлөшөнән баш тартмаған федераль льготниктар ҡала яны тимер юл маршурттарында - сикләүһеҙ, шулай уҡ шифаханаға ял итергә барғанда һәм ҡайтҡанда бушлай йөрөү хоҡуғына эйә.

# АЙЫРМА СИКТӘРЕНДӘ

**Ирем ведомство һағында эшләй ине, 2005 йылда үлеп китте. Балабыҙ бар. Ҡараусыһын юғалтыу буйынса пенсия тәғәйенләгәндә уның һуңғы эш ваҡыты иҫәпкә алынмаған, һалым инспекцияһында эшләгән осорон ғына иҫәпләгәндәр. Ҡараусыһын юғалтыу сәбәпле, балалар тағы ла ниндәй льготаларға эйә? Пенсия бик бәләкәй, ни бары 3 мең һум, ә пособие - 126 һум. Быға нисек йәшәргә?**

- Йән башына уртаса килем күләме республикалағы йәшәү минимумы дәүмәленән түбәнерәк булған граждандар, шул иҫәптән тулы булмаған ғаиләлә тәрбиәләнгән балалар социаль пособие алырға хоҡуҡлы ("БР-ҙа адреслы социаль ярҙам тураһында" БР Законы һәм "Башҡортостан Республикаһында халыҡҡа адреслы ярҙам күрһәтеү тәртибе тураһында" БР Хөкүмәте ҡарары нигеҙендә). Социаль пособие тәғәйенләү һәм түләү документтар һәм ғариза биргән кешенең йәшәгән урыны буйынса мөрәжәғәт иткән айҙан башлап Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының территориаль органдары тарафынан түләнә башлай. Социаль пособие күләме тейешле категория кешеләре өсөн йәшәү минимумы дәүмәле менән ғаиләнең йән башына уртаса килеме айырмаһы сиктәрендә иҫәпләп сығарыла. Уның максималь күләме - 125 һум. Ғаиләгә түләнеүсе социаль пособие күләме ай һайын иҫәпләнә һәм ғаиләнең уны алырға хоҡуҡлы һәр ағзаһына иҫәпләнгән социаль пособиелар суммаһына тигеҙ була.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Кесерткән



Май тыуғанда йәшәреп кесерткән сыға. Ул аҙыҡ ҡына түгел, ә дауалаусы ла:

❖ колит, көҙән йыйырыу, шеште бөтөрөү, үпкә таҙартыу, ҡан яңыртыу өсөн файҙаланыла;

❖ уның төнәтмәһе ҡандағы шәкәрҙе кәметә, анемиянан да ҡотҡара;

❖ һыуҙағы төнәтмәһе ҡан туҡтатырға ярҙам итә;

❖ яралы урынға кесерткән оно һипһәң, ул тиҙ төҙәлә.

Кесерткән тиҙ боҙола торған аҙыҡтүлекте оҙаҡ һаҡлау өсөн дә файҙаланыла. Быны өсөн уны ит араһына, балыҡ эсенә тултырыһың. Яҙғыһын унан салат (эҫе һыуҙа бешеклән алаһың) аш, бәлеш тә бешерәһең. Кесерткән бик файҙалы.

## Сәсәмә (туҡтауһыҙ йүткереү), ангина

1 кг тоҙҙо 2-3 ҡалаҡ ҡоро гәрсис йәки ҡыҙыл борос ҡушып болғатырға. Уны табала тәнде бешермәҫлек итеп йылытырға. Унайлы ғына тимер тасҡа бушатып, аяҡтарҙы шунда тығырға, тоҙ аяҡтарҙың өҫтән күмерлек булһын. Был дауаны көнөнә биш мәртәбә эшләргә кәрәк. Ул табандағы бөтә нөктәләргә тәьсир итә, ҡан әйләнеше яҡшыра, тамаҡтағы лайлалы ҡатлауҙар йыуыла, тын юлдары асыла.

## Паразиттарға ҡаршы дауа

Эстәге паразиттарҙы бөтөрөү өсөн бер үк күләмдә әрем, һарығүҙ (беҙҙең яҡта ҡыҙылбаш тиҙәр - золототысячник) үләндәрен ҡатнаштырып, 1 стакан ҡайнаған һыуға 1 ҡалаҡ шул ҡатнашманы һалып, 20 минут ҡайнатырға, һөҙөргә. Иртәнсәк ас ҡарынға 1 стакан эсергә. Дауаны 8 көн дауамында ҡулланырға.

## Шешектән, йәрәхәттән дауалау

Яҙ балтырған йыйып киптерергә онотмағыҙ. Эренләп торған яраға балтырған һытын тамыҙһаң, ул тиҙ йүнәлә. Ә ҡыш кипкән япрағын бешекләп ябаһың. Шешек тиҙерәк һытылһын өсөн юл япрағы, мунсала япрағы (дегәнәк), уғәй инә үләне япрағы, һарыҡтың ашҡаҙан тиреһен, йылан ҡабығын, әсе ҡамыр, еңелсә тоҙланған ҡаҙ майы менән йомортҡа ҡушылмаһын ябаһың. Элек эренле шешек оҙаҡҡа һуҙылһа, тере тәлмәрйендә лә япҡандар.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

✓ **"Ҡыпсаҡ сәме" феноменының асылы, моғайын, уларҙың тарихи үҙенсәлеге менән дә аңлатылалыр. Үҙ дәүерендә ике ҡитғаны берҙәй ялмап йәшәгән ҡеүәтле һәм бөйөк Дәште Ҡыпсаҡ империяһы варисҡтары бит улар.**



КИТАБЕННАС

## ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

173
Һиңә фәтүә бирһә мөфтөй хәҙрәт,
Үҙең менән кәңәшләшеү һәр саҡ кәрәк.

174
Был эш булһын һиңә изге васыяттай:
Изгелектәр ҡыла күрсе әсир затҡа.

175
Ҡасҡан кеүек йоттан,
Ваз кис һин алйоттан.

176
Бәхетһеҙлек ошо дүрттең береһендә:
Йә атында, йә ҡатында, йә күршеңдә, йә өйөңдә.

177
Булһағыҙ ихлас, эскерһеҙ,
Тик ихласлыҡ күрерһегеҙ.

178
Мәғрифәт тип был донъяла кем йәшәй хәләл,
Мәғрифәт әһле булыр әхирәттә лә.

179
Аш-һыуҙарын итһә бәрәкәтле,
Шул ҡатын-ҡыҙ булыр иң хөрмәтле.

180
Хәйерҙең иң арыуы -
Һыу менән һуғарыуың.

181
Мине нисек күркәм итеп
Яратҡанһың, йә Раббым,
Мәрхәмәтең халҡымды ла
Шулай күркәм ятарһын.

182
Был донъяның һаңғырауы,
Был донъяның дөм һуҡыры -
Тура юлды тапҡандан һуң
Шунан кире сыҡҡан булыр.

183
Йә, Раббым, үҙең һаҡлай күр
Фәҡирлектән, хурлыҡтан,
Меҫкенлек сырхауҙарынан,
Ялҡаулыҡтан, бурлыҡтан.

Йә, Раббым, үҙең һаҡлай күр
Ҡурҡаҡлыҡтан, тарлыҡтан.
Диуаналыҡ, көфөрлөктән,
Бурыстан, һаранлыҡтан.

Йә, Раббым, һаулыҡ насип ит,
Мансы муллыҡ, һимməтҡә.
Тормошомдо хөрмәт менән,
Ғилем менән зиннәтлә.

Ғәйбәт һүҙҙән, көнсөллөктән
Тик һиндә яҡлау таптым.
Дошмандан һиңә һыйынам,
Йә Раббым, Раббым, Раббым!

184
Насар шиғыр - Иблис һыбыҙғыһы,
Ялған - телдең иң ҙур хатаһы.
Һатлыҡ, хыянат йән - тамуҡ уты,
Хәмер - гонаһтарҙың атаһы.

185
Аллаһтың тыйған эштәрен
Ярамай оноторға.
Атаң-әсәң исеме менән
Ярамай ант итергә.

186
Ирҙең ҡатыны -
Уның яртыһы.

187
Элекке ҡәүемдәр ниңә
Дусар булды һәләкәткә?
Һәләкәттәр шул сәбәптән:
Хәлле кеше урлағанда
Хөкөм уны араланы.
Зәғиф кеше урлағанда
Аяу белмәй язаланы.

**(Дауамы бар).**

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

**Бөйөк Еңеү байрамы алдынан Көйөргәҙе районының Яҡшымбәт ауылында башҡорттоң ҡыпсаҡ ырыуы кенәзе Мишәүле Ҡарағужаҡ бейгә һәйкәл асылды. Был мөһим изге эште ойоштороусылар Мишәүле Ҡарағужаҡ кенәз нәҫеленән сыҡҡан республикабыҙҙың арҙаҡлы шәхестәре: ағалы-ҡустылы Марат һәм Румиль Аҙнабаевтар, Рәҡит Аҙнабаев, Яҡшымбәт ауылы хакимиәте ( хакимиәт башлығы - Рәүеф Абдуллин), урындағы "Осҡон" крәҫтиән хужалығы (етәксеһе - Рәмил Мостафин) һәм Яҡшымбәт ауылы халҡы. "Ҡыпсаҡ ырыуы бейе Ҡарағужаҡ Мишәүле кенәзгә - ейәндәренән" тигән яҙыулы һәйкәл-обелиск барлыҡҡа килде Яҡшымбәт ауылында.**
**Тарихтан белеүебеҙсә, Иван IV Ҡаҙанды алғандан һуң башҡорттарға өндәмә менән мөрәжәғәт итә. Батшаның хатына яуап итеп, башҡорттоң үҫәргән ырыуынан Бикбау, бөрйән ырыуынан Иҫке бей (Иҫәкәй бей), ҡыпсаҡ ырыуынан Мишәүле Ҡарағужаҡ, тамъян ырыуынан Шағәле Шаҡман бейҙәр Иван батшаға барып, берләшеү хаҡында килешеү төҙөп, грамота алып ҡайта. Мәскәү кенәзлегенең (артабан Рус батшалығы) башҡорттар менән был тәүге тапҡыр төҙөлгән килешеүе була. Килешеүҙәрҙең 2-сеһе 1917 йылда, өсөнсөһө 1991 йылда төҙөлә. Дөрөҫөн әйткәндә, башҡорттарҙың Рус дәүләте менән берлектә төҙөлгән берҙәм дәүләтселек тураһындағы килешеүенең тәүгеһе ана шул дүрт башҡорт ырыуы бейе тарафынан атҡарыла ла инде. Яҡшымбәт ауылында башҡорттоң ҡыпсаҡ кенәзе Мишәүле Ҡарағужаҡҡа асылған һәйкәлдең сәйәси әһәмиәте тап ошоға ҡайтып ҡала. Һәйкәл асыу байрамында сығыш яһаусы филология фәндәре докторы Әхмәт Сөләймәнов сараның тап ошо әһәмиәтен билдәләп үтте лә инде. Ошо төбәктең Кинйәбай ауылында тыуып үҫкән билдәле яҙыусы Ғәлим Хисамов иһә элек-электән был төбәк ҡыпсаҡ ауылдарының барыһы ла кенәз Мишәүле биләмәһенә инеүе хаҡында мәғлүмәт еткерҙе. Мин иһә, атаҡлы ҡыпсаҡ кенәзенә бәйле башҡа күренештәр хаҡында уйландым.**

# ҠЫПСАҠ ЫРЫУЫ БЕЙЕ...

## Ҡарағужаҡ Мишәүле кенәзгә - ейәндәренән

### Ҡыпсаҡ сәме

Республика буйлап та, унан ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙ араһында ла күп йөрөргә тура килә. Бар нәмә сағыштырыуҙа беленә, тигән һымаҡ, милләтебеҙҙең ҡыпсаҡ ырыуы вәкилдәре йәшәгән ауылдар янындағы иген баҫыуҙарының һәр ваҡытта ла һөрөлгән, сәселгән, уңышы йыйып алынған булыуына ла иғтибар итмәй ҡалмайым, әлбиттә. Бигерәк тә Күгәрсен, Ырымбур өлкәләре фермерҙарының ныҡҡа арҡа терәп йәшәүҙәренә һоҡлана инем. Әле килеп, шулай уҡ ҡыпсаҡтар көн күргән Яҡшымбәт ауылы биләмәһендә лә бар ерҙәрҙең һөрөлгән һәм сәселгән булыуы электән күңелдә йөрөгән уйымды нығытты. Эйе, ҡайҙа ҡыпсаҡтар йәшәй, шул ауыл янындағы ауыл хужалығы ерҙәре ҡараулы, сәселгән, һәр хәлдә, ташландыҡ түгел. Биләмәгә Яҡшымбәт, Урта баба, Үрге баба, Түбән баба, Көйөргәҙе, Ҡотлоюл, Абдул, Якуп, Ҡарай, Яҙлау ауылдары ҡарай, уларҙа барлығы 3500 кеше йәшәй, бер Яҡшымбәттә йәшәүселәрҙең һаны ғына ла 989 кеше. Республика буйынса күп кенә ауылдарҙа йәшәгән халыҡ кәмегән саҡта, бында, киреһенсә, халыҡ һаны арта. Яҡшымбәттәр хатта элекке колхоздарын да һаҡлап ҡала алған. "Осҡон" крәҫтиән хужалығы тип атала ул. Әйткәндәй, Мишәүле Ҡарағужаҡ кенәзгә һәйкәл эшләгән саҡта крәҫтиән хужалығы техника менән ярҙам күрһәткән.

Ҡыпсаҡтар сәмле, ныҡышмал улар. Әле килеп яҡшымбәттәр республикала барған "Айыҡ ауыл" акцияһына ҡушылған. "Беҙҙең ауыл биләмәһенә ҡараған бәләкәй ауылдарҙа эсеүсе кеше бөтөнләй юҡ. Үҙәк биләмәлә лә хәҙер 2-3 кенә эсеүсе кеше ҡалды. Уларына ла тәьсир итеү механизмдары уйланылған. Яңыраҡ айыҡ туй ҙа үткәреп ебәрҙек. Халыҡ дәртле, сәмсел, донъя көтөргә тырышып тора. Ерҙәребеҙ хатта иң ауыр тип һаналған 90-сы йылдарҙа ла эшкәртелмәй, һөрөлмәй-сәселмәй ҡалманы. Шәхси хужалыҡтарҙа ла малдар һаны арта. Шуға күрә беҙҙә хәҙер көтөүлектәр, сабынлыҡтар өсөн ерҙәр тығынлығы һиҙелә башланы", ти Яҡшымбәт ауылы хакимиәте башлығы Рәүеф Абдуллин.

"Кыпсаҡ сәме" феноменының асылы, моғайын, уларҙың тарихи үҙенсәлеге менән дә аңлатылалыр. Үҙ дәүерендә ике ҡитғаны берҙәй ялмап йәшәгән ҡеүәтле һәм бөйөк Дәште Ҡыпсаҡ империяһы варисҡтары бит улар.

### Ике шәхес хаҡында

Ҡыпсаҡ кенәзе Мишәүле Ҡарағужаҡ нәҫеленән сыҡҡан шәхестәр хаҡында том-том китаптар яҙырға булыр ине. Кемдәр генә юҡ уларҙың араһында! Ишандар, хәҙрәттәр, хажиҙар, дәүләт эшмәкәрҙәре, илселәр, академиктар, фән докторҙары, сәнғәт әһелдәре, ҡурайсылар, кинорежиссерҙар, мәғдәнселәр, табибтар, уҡытыусылар, эшҡыуарҙар, һ.б. Был юлы мин уларҙың араһынан күптән инде булмыштары менән мине хайран иткән икеһе хаҡында ғына бәрәр кәлимә һүҙ әйтеп үтмәксемен. Улар: Әхмәтзәки Вәлидиҙең ҡайныһы Хажимөхәммәт хажи Яҡшымбәтов һәм медицина фәндәре докторы, профессор, Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре һәм атҡаҙанған табибы, БР академигы, Рәсәй Медицина-техник фәндәре академияһы мөхбир ағзаһы, Катаракта һәм рефракцион хирургия буйынса Халыҡ-ара совет һәм Европа йәмғиәте ағзаһы Марат Тәлғәт улы Аҙнабаев.

Ҡызы Нәфисәнең хәтерләүҙәре буйынса, Хажимөхәммәт хажи Яҡшымбәтов революциянан алда, Асҡарҙа йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, ҡыҙҙарын Мәскәүҙең Ҙур театрында барған спектакль премьераларына алып барыр булған. Хәҙерге техника





ҡеүәтле булған заманда беҙ был хәлде аңлар инек, ә ул саҡта? Улар тәүҙә Асҡарҙан Өфөгә ат мисәп егелгән ҡырандаста килгән, артабан поезд менән Мәскәүгә юлланған. Мәскәүгә барып етеп, театрға инер алдынан Хажимөхәммәт хажи ки-бетҡә инеп, ҡыҙҙарына күлдәк һатып алыр булған. Быға хәҙерге кешене ышандырыуы ла ҡыйын. Ә бит Хажимөхәммәт хажиҙың ер аяғы ер башы урынға спектакль премьераһына барырлыҡ күңел ихтыяжы һәм быға мөмкинселегә булыуы күп нәмә хаҡында һөйләй. Беҙ йәмәғәтселек транспорты менән сыбарланған баш ҡалала йәшәйбеҙ. Көн һайын драма, опера һәм балет театрҙарында үҙебеҙҙең һәм донъяның башҡа тарафтарынан килгән сәнғәт коллективтарының тамашалары, спектакль премьералары булып тора. Беҙ уларға барыу ғына түгел, хатта ҡайҙа нимә булғанын да белмәй ҡалабыҙ. Улай ғына ла түгел, башҡорт зыялылары хатта үҙебеҙҙең телдә барған спектаклдәргә йөрөмәй. Ниндәй юғары интеллектҡа эйә булған Хажимөхәммәт хажи Яҡшымбәтов!

Ә инде атаҡлы табиб, ғалим Марат Аҙнабаев әле булһын тура мәғәнәһендә лә, образлы итеп әйткәндә лә кешеләрҙең донъяға күҙен асып, оло фиҙаҡәрлек күрһәтеп йәшәй. Медик булараҡ, уның кешеләргә яҡты донъя нурын бүләк итеүе хаҡында барса илебеҙ халҡы, хатта сит ил граждандары ла белә. Йәйы сыҡҡанда әйтеп үтәйем: ҡасандыр ул миңә яҡты донъяны бүләк итеүсе әсәйемә лә күреү һәләтен ҡайтарҙы. Ғүмеренең аҙағынаса әсәйем Марат Тәлғәт улына рәхмәт әйтеп йәшәне. Ә бына, шәхес булараҡ, мин уның менән аралашҡан һайын хәкиҡәтҡә үтәнән-үтә ҡарау һәләтенә һоҡланып бөтә алмайым. Шундайын зирәклек, интеллект, миһырбанлыҡ, фиҙаҡәрлек, аристократлыҡ Яҡшымбәт тигән ауылда тыуып үҫкән кешегә ҡайҙан килгән һуң, тип аптырағаным да булды. Тормош булғас, төрлө саҡ була. Шуға күрә ҡайһы ваҡыт берәр кешенең кәңәшенә мохтаж булаһың. Ошондай саҡтарҙа Марат Тәлғәт улына мөрәжәғәт итеүселәр уның биргән кәңәшен алтынға тиңләй, уныңса эшләһән, барыһы ла килә лә сыға, тиҙәр. Әйткәндәй, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Румиль Тәлғәт улы ла ағаһына оҡшаған. Уларҙың, ағалы-ҡустылы Аҙнабаевтарҙың, студент саҡтарында күркәмлектәре һәм ыҫпайлыҡтары менән бар Өфөнө хайран итеп йөрөүҙәрен әле лә иҫкә алып һөйләйҙәр.

Һәр хәлдә, Хажимөхәммәт хажи Яҡшымбәтов һәм Марат Аҙнабаев шәхестәренә бәйле был һорауҙар мине ошоғаса уйға һала килә ине. Әле Яҡшымбәт ауылында үткән сарағa барып, үҙемде күптән тынғыһыҙлаған һорауҙарға яуап таптым кеүек. Башҡорттоң ҡыпсаҡ кенәзе Мишәүле Ҡарағужаҡ затынан бит улар! Тархан тоҡомонан! Феодал нәҫеленән!

## Кенәздең түңгәүер ырыуы вариҫтары

Яҡшымбәт ауылында үткән сараға Әбйәлилдән Мишәүле Ҡарағужаҡ тархан нәҫеленән сыҡҡан табиб-онколог Ринат Мәһәҙиев менән мәғдәнсе-эшҡыуар Салауат Суфиянов килде. Улар һәйкәл асыу байрамына Әбйәлилдә йәшәүсе был зат тармағының атаҡлы кенәзгә барып ялғанған шәжәрәһен дә алып килгәйне. Шуныһы иғтибарға лайыҡлы: Мишәүле Ҡарағужаҡ кенәздең Әбйәлил районында йәшәгән вариҫтары үҙҙәрен түңгәүер ырыуы вәкилдәре тип таный. Ҡайныһы Хажимөхәммәт Яҡшымбәтовтың түңгәүер ырыуы башҡорто булыуын Әхмәтзәки Вәлиди ҙә "Хәтирәләр" ендә түбәндәгесә яҙып үтә: "Кире ҡайтышлай, август аҙаҡтарында Әбйәлил ауылына килеп, Хажимөхәммәт хажи имамдың ҡыҙы Нәфисәгә өйләндем. Улар башҡорттоң Түңгәүер ҡәбиләһенән. Хажимөхәммәт хажи - атайымдың яҡын дуҫы, Нәфисәнең әсәһе - Троицкиҙағы мәшһүр Зәйнулла ишандың ҡыҙы..."

Ә ни өсөн ҡыпсаҡ кенәзенең вариҫтары икенсе ырыуға күскән һуң? Был һорау сара ваҡытында ҡуйылды, әммә уға яуап бireүсе табылмаҙы. Әммә был хәлдә ике сәбәп менән енел генә аңлатып була:

1.Халыҡта "Ауылы берҙең ҡәүеме бер" тигән әйтем бар. Элек ул ҡанун да һанланған йәғни ситтән килеүсе ҡәүем (халыҡ, милләт) вәкиле урындағы ҡәүемдә ҡабул итергә тейеш булған. Иғтибар итегеҙ: бында һүҙ халыҡ, милләт атамаһы хаҡында бара. Ошо логика буйынса ҡарағанда, урындағы башҡорт йәмғиәте ситтән килеүсене үҙенең ырыуына ғына түгел, хатта ҡәүеменә күсеү шарты менән генә ҡабул иткән.

2.Элек-электән башҡорттарҙың ергә хоҡуғы ырыу шәжәрәһе менән нығытылған йәғни ырыу ерена тик ошо ырыу вәкилдәре генә дәғүә итә алған. Тимәк, бында Мишәүле Ҡарағужаҡ тархандың түңгәүер араһына килеп ултырған вариҫтарының ни өсөн түңгәүер ырыуы вәкиле булып китеүе бәхәсһеҙ аңлашыла.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Яҡшымбәттәр үҙҙәренең бабалары һәм ҡарттаталары Мишәүле Ҡарағужаҡ кенәздең вариҫы булараҡ, уның мираҫына тоғролоғон илебеҙ, милләтебеҙ өсөн фиҙаҡәр хеҙмәте менән иҫбат итә. "Айыҡ ауыл" хәрәкәтенә лә улар ҡушылмай кемдәр ҡушылырға тейеш һуң? Һәйкәл асылған көндө ошо ауылдан Бөйөк Ватан һуғышында илебеҙ азатлығы өсөн ҡорбан булған яугирҙәр обелискыһына ла сәскәләр һалынды. Эскелекте еңеүе нимә генә инде - милләт ғүмеренең ваҡыт һынауын үтеп, Гитлерҙың үҙен ояһында дөмөктөргән ҡыпсаҡ яугирҙарына.**

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.

*СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ*

## "БЫНАМЫН ТИГӘН ЕГЕТ" ТИГӘНДӘР БАРМЫ АУЫЛДАРҘА?

Бөгөнгө көндә ауылда йәштәр араһында ике типик образ күҙәтелә. Тәүгеһе - үҙ эшен асып, башҡа ауылдаштарына ҡарағанда яҡшыраҡ йәшәгән, шамбы һымаҡ шыуғалаҡ, киске, төнгө осорҙа йәш ҡыҙҙарҙы сит ил автомобиленә ултыртып, затлы һыра-мыра менән һыйлап, эсереп, әүрәтеп алып йөрөгән кешеләр. Икенсе төркөм - һуҡыр бесәй балалары һымаҡ тегендә төртөлөп, бында һуғылып, эш эҙләп интеккән, тормоштарын осон-осҡа ялғай алмай, өйләнергә лә баҙнат итмәй йәшәгән, юғалып ҡалған йәш кешеләр тибы. Ике төркөмдә лә иң яҡшылар рәтенә индереп булмай.

Замана шауҡымдарына ҡарамай, үҙ ваҡытында өйләнеп, ғаиләһендә тырышып донъя көткән, быуындар күсәгилешлеген һаҡлаған йәштәрҙе айырып әйтергә кәрәк. Ауылда улар ҙа бар. Быны шундай егеттәр - ауылдың киләсәге.

Өйләнеү мәсьәләһе айырым иғтибарға лайыҡтыр, тип уйлайым. Ғаиләң булып, үҙең бер ҡатын-ҡыҙға "умыртҡа һөйәге" ролен үтәһең, уны аҙғын юлдарҙан һаҡлай алаһың. Юғиһә, бөгөн "яҡшы ҡыҙҙар юҡ", тип ҡыҫҡырырға ярабыҙ. Иниә ундай ҡыҙҙар булмаһын? Бары тик ҡыҙҙарҙың әсә була торған ваҡытында ҡәләш итеп алырға тәҡдим итеүсе генә булырға тейеш. Ундай кеше булмағанға күрә, альтернатив йәшлиы, альтернатив "мөхәббәтте" эскесе, тәмәкесе аҙғын егеттәр ҡосағынан эҙләйҙәр, альтернатив тормош алып баралар ҙа, шуға ла күңелдәре менән яҡшы кеүектәр, ысынында, яндарында яҡшы ирҙәре булмағас, ысын тәғәйенләнешен тормошҡа ашыра алмайҙар.

Һәйбәт егеттәр ҙә бар. Совет осорондағы һымаҡ ниндәйҙер бер дәрәҫ милли идея барлыҡҡа килеп, хөкүмәтебеҙ уны тормошҡа ашыра башлаһа, бәлки, улар үҙҙәрен күрһәтә алыр ине. Айыуҙай мыҡты көүҙәле булыуҙарына ҡарамаҫтан, ҡыл да ҡыбырлатмай ятҡан, эскенән башҡаны белмәгән "паразиттар" яйлап тормош мәғәнәһенән аңлар, аңламаһа, тәүге пландан арткы планға күсер ине. Әлегә ауыл халҡының күҙ алдында тап шундайҙар "Алланың ҡашҡа тәкәһе" кеүек күренә. Ауылда үҫеп перспективаһы булмауы тырышып йәшәгән кешеләрҙе юҡ һымаҡ күрһәтә. Ә уҡыған, белем алған йәштәр, уҡыуының һөҙөмтәһе артынан ҡыуып, мөмкинлектәрен тулыһынса тормошҡа ашырыу өсөн ҡалаға китә.

**Илсур ИРНАЗАРОВ.**
**Баймаҡ районы Темәс ауылы.**

*БАТЫРҘАРҘЫҢ ИСЕМЕН БЕЛ!*



# УРАЛТАУ ОСОРҒАН БӨРКӨТТӘР

## Ғәҙелша Ейәнсурин

Ғәҙелша Дәүләт улы Ейәнсурин 1894 йылда Ырымбур губернаһының Ырымбур өйәҙендә Буҫтыбай ауылында (хәҙерге Күгәрсен районы) тыуған. Сәйетҡол ауылында 2 синыфлы училищела уҡый. Артабан Ырымбур ҡалаһында Хөсәйеновтың типографияһында эшләй. 1916 йылда Беренсе донъя һуғышына алынып, уҡыу командаһына ебәрелә. Унтер-офицер званиеһы ала. Көнбайыш фронтта 104-се пехота полкының взвод командиры булып хеҙмәт итә. 1917 йылдың декабрендә фронттан ҡайтҡас, 2-се Ҡараҡыпсаҡ улысы идараһында делопроизводитель булып эшләй. Башҡортостан автономияһы төҙөлгәс, Ҡыпсаҡ кантоны идараһында эшләй.

1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Советтар яғына сыҡҡас, Башревкомдың бойороғо буйынса Ҡыпсаҡ кантисполкомы ойоштороу менән шөғөлләнә. Әммә ауырып китеп, тыуған ауылына ҡайта, был осорҙа Башҡортостан территорияһын аҡтар баҫып ала. Колчак ғәскәренә хеҙмәткә алына. Белов корпусындағы кавалерия полкында хеҙмәт итә. 1919 йылдың августында Орск янында аҡтар сигенә башлағас, бер төркөм башҡорт һалдаттары менән ҡыҙылдар яғына сыға. Һалдаттарҙы төрлө частарға тараталар. Ғ. Ейәнсурин яңы ғына ҡыҙылдар яғына сыҡҡан Мортазин бригадаһына барып эләгә. Башҡорт кавалерия бригадаһында эскадрон командиры сифатында 1919 йыл Урал фронтында, 1920 йылда поляктарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. 1920 йылдың декабренән 2-се Башҡорт кавалерия полкының эскадрон командиры итеп тәғәйенләнә. Польша фронтында күрһәткән батырлыҡтары өсөн 1922 йылда Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Реввоенсоветтың 34-се һанлы (1922 йылдың 7 феврале) фарманында былай тиелгән: "1-се эскадрон командиры Ейәнсурин Ғәҙелша иптәш - 1920 йылдың 14 ноябрендә Юзвин ауылы янында иптәштәрен үҙенең ҡыйыулығы менән рухландырып, үҙҙәрен уратып үтергә маташыусы дошманға ҡаршы алып киткәне һәм атып ятҡан бер пулеметты, ике пулеметсыны йәнә биш әсир алғаны өсөн".

1921 йылдың декабрендә Башвоенком тарафынан Стәрлетамаҡҡа саҡыртып алына һәм атлы конвой командаһының начальнигы итеп тәғәйенләнә, һуңынан БашЧК-ла эшләй. 1923 йылдың мартында Йылайыр кантонына милиция начальнигы урыбаҫары итеп ебәрелә, артабан Башглавсудтың Йылайыр кантонындағы вәкиле итеп тәғәйенләнә. 1925 йылда Тамъян-Ҡатай кантонына, һуңынан Арғаяш кантонына күсерелә. 1928 йылдан Өфөлә БАССР прокуроры ярҙамсыһы вазифаһын башҡара. 1934 йылдан БАССР-ҙың коммуналь хужалығы комиссары булып эшләй. 1937 йылдың 9 августында буржуаз-милләтселектә ғәйепләнеп, ҡулға алына һәм атыла. 1956 йылда реабилитациялана.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

> ✓ *Рәсәйҙә мин һуңғы алты йыл эсендә беренселекте бер кемгә лә бирмәйем. Миндә аҙ һанлы халыҡ комплексы юҡ, киреһенсә, мине күргәс тә "О, башҡорт!" тип торалар, туғандаш халыҡтар барыһы ла, һин беҙҙеке, ти.*

# КӨСЛӨЛӘРГӘ

## йәки Яңы башҡорт

**Яңыраҡ Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайының бер төркөм ағзалары Өфөлә булып китте. Редакциябыҙҙа ла ҡунаҡта булды силәбеләр. Улар: Силәбе башҡорттары ҡоролтайы йәмәғәт ойошмаһы рәйесе урынбаҫары Флүзә Ғайсина, ҡоролтай ағзалары, Башҡорт йәштәре берлеге рәйесе Тимур Сафиуллин һәм спортсы, Рәсәйҙең көслө атлеттары федерацияһының вице-президенты Эльбрус Ниғмәтуллин. Улар менән әңгәмәбеҙ Силәбе өлкәһе башҡорттарының бөгөнгө хәле, ғөмүмән, милләтебеҙ яҙмышы хаҡында барҙы.**

**▶ Башҡортостанға юл төшөп торалыр инде, был юлы ниндәйерәк маҡсаттар әйҙәп алып килде һеҙҙе?**

**Флүзә Ғайсина:** Хәҙер тормош шундай тиҙ темп менән алға бара, ҡоролтай эше лә әүҙемләшә, яңынан-яңы проекттар барлыҡҡа килә. Ошонан сығып, яңы теләктәр тыуа, эштең яңы формалары кәрәклеге асыҡлана һәм шуға ла беҙҙең республика менән үҙ-ара тығыҙыраҡ бәйләнештәр булдырғыбыҙ килә. Шуға ла килеп, танышып, үҙебеҙҙе күрһәтеп, нимә эшләргә теләгәнебеҙҙе белдереү, ҡайһы бер мәсьәләләрҙә ярҙам һорау, ҡайһыларында үҙебеҙҙең ярҙамыбыҙҙы тәҡдим итеү маҡсаты менән Өфөгә юл тоттоҡ та инде. Силәбелә башҡорттарҙың йәмәғәт ойошмаһына мөнәсәбәт яҡшы, шуға ла унда Мәҙәниәт, Мәғариф министрлыҡтарына, матбуғат идаралығына, хатта вице-губернаторҙың үҙенә инеп, төрлө мәсьәләләрҙе хәл итергә мөмкинлегебеҙ бар. Башҡортостан менән дә ошондай тығыҙ һәм яҡын мөнәсәбәттәр булдырып, һүҙ һөйләүҙән эш башҡарыуға күсергә ине. Республиканың Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығын үҙгәртеү беҙгә, ситтә йәшәгән башҡорттарға, ауырлыҡ тыуҙырҙы, Башҡортостан менән бәйләнештәрҙе юғалтыуға килтерҙе. Мәғариф министрлығы менән был йәһәттән еңелерәк, ә мәҙәниәт өлкәһендәге мәсьәләләрҙе хәл итеүе ауыр. Хат китә, әммә яуап килмәй, сөнки уның менән махсус шөғөлләнгән белгестәр юҡ. Мәҙәниәт министрлығына шылтыратһаң, Хөкүмәткә мөрәжәғәт итегеҙ, тип яуап бирәләр. Нимә генә тимә, Башҡортостандың ярҙамынан, уның терәгенән тыш беҙгә төбәк башҡорттары араһында эш алып барыуы ауырға төшә.

**Эльбрус Ниғмәтуллин:** Эйе, ауыр, әммә быны республиканың ярҙамынан тыш беҙ бер нәмә лә эшләй алмайбыҙ, тип аңларға кәрәкмәй. Өфө беҙҙең тарихи баш ҡалабыҙ, әммә тик уға ғына ҡарап тороу дөрөҫ түгелдер. Әммә беҙ республика менән тығыҙ бәйләнештә булғанда күберәккә өлгәшәсәкбеҙ - шуныһы мөһим. Тәжрибә уртаҡлашыу, үҙ-ара нимәгәлер өйрәнеү йәһәтенән дә милләттәштәребеҙ менән бүлешер тәжрибәбеҙ бар. Мәҫәлән, бөгөн Силәбе хаҡлы рәүештә төрлө спорт төрҙәре буйынса чемпиондар төбәге иҫәпләнә. Шуға ла спорт йүнәлеше буйынса беҙ Башҡортостанға бик теләп ярҙам итер инек. Ни генә тимә, спорт аша башҡорт мәҙәниәтен юғары кимәлгә күтәреп, уны бөтә донъяға күрһәтергә була. Бер генә миҫал. Ни өсөн республикаға донъяның иң көслө кешеләрен йыйып, берәй телепроект эшләмәҫкә? Бында спортсыларҙың кем көслөрәк икәнлеген асыҡлау сәбәп кенә, иң көслө атлеттарҙың ярышы фонында республиканы, тәбиғәтебеҙҙе, Салауат Юлаев һәйкәлен, милли байрамдарҙы, тирмәләрҙе, шағирҙарҙы һәм тағы әллә күпме нәмәне күрһәтергә була. Эш бит ул ярышта ҡатнашырлыҡ башҡорт спортсыларының етерлек булмауында түгел, әйҙә, унда сит ил спортсылары ла ҡатнашһын. Тик улар кире үҙ илдәренә ҡайтып еткәнсе был ярыш, уның менән бер рәттән Башҡортостан, уның мәҙәниәте, йолалары тураһындағы мәғлүмәт интернет аша бар донъяға таралып өлгөрәсәк. Сөнки интернет мәғлүмәт сығанаҡтары араһында алдынғы урынды яулай бара. Социаль селтәрҙәр ҙә йәштәр араһында бик популяр.

Бөгөн ниндәйҙер проблемаларыбыҙ бар икән, мәҫәлән, балаларыбыҙ туған телен белмәй, тип зарланабыҙ икән, бында үҙебеҙҙән башҡа бер кем дә ғәйепле түгел. Әгәр ҙә белемебеҙ юҡ икән, әгәр беҙ көслө түгел икән - ул сағында беҙ кемгә кәрәк һуң? Конкуренцияны күтәрә алмағас, әлбиттә, эргәбеҙҙә йәшәгән башҡа милләттәр беҙҙе йотоп бөтәсәк - был тәбиғәт законы.

**Флүзә Ғайсина:** Балалар, йәштәр башҡорт булырға теләһен өсөн башҡорт булыу модалы булырға һәм ғорурланып телгә алырлыҡ, уларға тиңләшергә теләрлек башҡорттар булырға тейеш.

**Эльбрус Ниғмәтуллин:** Силәбелә быға тиклем үҙен урыҫ милләтенән тип иҫәпләп йөрөүселәрҙең миңә яҡынларға теләп, быны минең дә өләсәйем йәки олатайым башҡорт булған, тип әйтеүселәр күп. Ысынлап та, ҡатнаш никахтар күп бит инде. Һин минең туғаным, тиеүселәр бар. Бындай осраҡтарҙа, эйе, беҙ туғандар, тип улар менән ризалашам да ҡуям, сөнки туғанлыҡ хисе кешеләрҙе берләштереү һәләтенә эйә. Бәләкәй генә масштабта булһа ла, ошо берләшеүҙе мин тоям.

**▶ Тимәк, һеҙ яңы башҡорт имиджын көслө башҡортта күрәһегеҙ булып сығамы?**

Әйҙәгеҙ, улай булғас, башҡорт ул аҙ һанлы милләт, уларҙың шундай данлы тарихы бар, уларҙы гел генә кемдер буйһондорорға тырышҡан, тип үҙебеҙҙе ҡойма менән уратып алайыҡ. Балаларыбыҙҙың белеме булмаһа ла, уҡыу йорттарына индерәйек, ярыштарҙа көсһөҙ генә булһа ла, башҡорт булғаны өсөн еңеүсе тип атайыҡ, түштәренә миҙал эләйек. Тик был рәүешле яһалма шарттар тыуҙырып ҡына милләтте күтәреп булмай, ул ҡаты көрәш шарттарында ғына көслөгә әүереләсәк. Быны мин башҡорт булған өсөн генә башҡорттар араһында ярышып йөрөһәм, бөгөн яулаған уңыштарыма өлгәшкән булыр инемме? Стронгмен буйынса үҙемдән 100 килограмға ауыр, бер башҡа бейегерәк булған спортсылар менән көрәшәм, әлбиттә, гел еңмәйем, шулай ҙа иң көслө ун спортсы исемлегенә инәм. Рәсәйҙә мин һуңғы алты йыл эсендә беренселекте бер кемгә лә бирмәйем. Миндә аҙ һанлы халыҡ комплексы юҡ, киреһенсә, мине күргәс тә "О, башҡорт!" тип торалар, туғандаш халыҡтар барыһы ла, һин беҙҙеке, ти, барыһының да Башҡортостанды килеп күргеһе килә. Мин көслө һәм шуға ла мин барыһына ла ҡыҙыҡлымын. Эйе, бик еңел булмаған заманда йәшәйбеҙ, әммә беҙгә үҙебеҙҙе һаҡлап ҡалырға кәрәк, шуға ла белемле һәм көслө булайыҡ.

**Эльбрус Ниғмәтуллин:** Бында көслө һүҙе физик көскә генә бәйле түгел. Һәр кем үҙ өлкәһендә көслө булырға тейеш. Бына Тимур Сафиуллинды мин бик көслө кеше, тип атар инем. Үҙенең белеме, һәләте, көсө менән эргәһенә 1500-2000 тирәһе йәш кешене туплай алды ул.

**Тимур Сафиуллин:** 2006 йылда Силәбелә ойошма төҙөгән саҡта үҙебеҙ өсөн Силәбе өлкәһе йәштәренең принциптарын билдәләгәйнек. Иң беренсе - уңышҡа ынтылыу, йәш башҡорттоң ыңғай образын тыуҙырыу, ойошманың эске һәм тышҡы эшмәкәрлегендә ҡатнашыу һәм башҡорт йәштәре берлеге ойошторған бар сараларҙы ла айыҡ үткәреү. Ошо дүрт принцип ойошманың нигеҙен тәшкил итә һәм бөтә эшебеҙ, үткәргән сараларыбыҙ ошо принциптарға ҡорола. Дискотека икән - айыҡлыҡҡа, спорт сараһы икән - сәләмәт йәшәү рәүешенә өндәүгә ҡорола, башҡорт атамалы бейеклектәрҙе үрләү акциялары икән, унда ла был принциптар күҙәтелә. Муниципаль, дәүләт власть органдары ойошторған бөтә сараларҙа ла ҡатнашабыҙ, йәмәғәт ойошмалары тәҡдим иткән бөтә акцияларға ҡушылабыҙ. Ошо көндәрҙә генә ISIK халыҡ-ара ойошмаһы менән рәсми эшмәкәрлек тураһында килешеү төҙөнөк. Был беҙгә донъя кимәлендә үҙебеҙҙе күрһәтеү мөмкинлеген бирә. Мәҫәлән, Колумбия, Ҡытайҙан Рәсәйгә килгән студентты милләтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ менән таныштырабыҙ. Беҙ хатта башҡорт йәштәре берлеге активына башҡа милләт вәкилдәрен дә алабыҙ. Әлбиттә, ойошманың нигеҙен башҡорт йәштәре тәшкил итә, логотип, эмблемалар ҙа милли тематикалы, шул уҡ ваҡытта ойошмала тик башҡорттар ғына булырға тейеш тигән ҡаты талап юҡ. Йәштәрҙе, беҙҙе кәмһетәләр, беҙҙе ҡыҫырыҡлайҙар, тип әйтеүҙән тыябыҙ. Өлгө итеп Эльбрус Ниғмәтуллинды, Сабир һәм Хәбир Сөләймәновтарҙы, Денис Шафиҡовты килтерәбеҙ. Улар уңышлы кеше булып ҡына ҡалмай, ә үҙҙәре лә һиҙмәҫтән башҡорт халҡының мәҙәниәтен пропагандалау буйынса эш алып бара. Ошо принциптар менән үҙебеҙ тирәләй бик күп йәштәрҙе йыя алдыҡ һәм беҙ үткәргән сараларҙа 1200 тирәһе кеше йыйыла. Башҡорт кешеһенең яңы имиджын мин шулай итеп күрәм. Башҡорт халҡының ҡиммәттәрен пропагандаларға һәм үҙебеҙ көслө булырға теләһәк, быға ынтылырға, бурыстар ҡуйып, уларҙы тормошҡа ашырыу өҫтөндә эшләргә кәрәк. Силәбелә хәҙер әүҙем йәштәрҙән торған актив барлыҡҡа килде, улар үҙҙәренең ниндәйҙер идеяларын да тәҡдим итә. Мәҫәлән, башҡорт сувенирҙары, башҡорт футболкалары етештереп халыҡҡа тәҡдим итеүсе егеттәребеҙ бар, ә беҙ үҙебеҙҙең сараларҙа был тауарҙарҙы күрһәтергә мөмкинлек бирәбеҙ. Бушлай самбо, волейбол түңәрәктәре астыҡ, велосипедта туристик сәйәхәттәр ойошторабыҙ, башҡорт теле курсы эшләй ине, был айҙан Гүзәл Вәхитова уны яңынан тергеҙә. Башҡортса бөтөнләй һөйләшә белмәгән йәштәр бик теләп йөрөй унда һәм ярты йылдан уларҙың телмәрендә башҡорт һүҙҙәре барлыҡҡа килә. Был курстарҙа башҡа милләт йәштәре лә башҡорт телен өйрәнә.

> *Ни өсөн республикаға донъяның иң көслө кешеләрен йыйып, берәй телепроект эшләмәҫкә? Бында спортсыларҙың кем көслөрәк икәнлеген асыҡлау сәбәп кенә, иң көслө атлеттарҙың ярышы фонында республиканы, тәбиғәтебеҙҙе, Салауат Юлаев һәйкәлен, милли байрамдарҙы, тирмәләрҙе, шағирҙарҙы һәм тағы әллә күпме нәмәне күрһәтергә була. Эш бит ул ярышта ҡатнашырлыҡ башҡорт спортсыларының етерлек булмауында түгел, әйҙә, унда сит ил спортсылары ла ҡатнашһын. Тик улар кире үҙ илдәренә ҡайтып еткәнсе был ярыш, уның менән бер рәттән Башҡортостан, уның мәҙәниәте, йолалары тураһындағы мәғлүмәт интернет аша бар донъяға таралып өлгөрәсәк. Сөнки интернет мәғлүмәт сығанаҡтары араһында алдынғы урынды яулай бара. Социаль селтәрҙәр ҙә йәштәр араһында бик популяр.*

**▶ Башҡортостанда тел өйрәнеү, мәҙәниәтте һаҡлап ҡалыу йәһәтенән башҡорттарҙы дәүләт механизмы һаҡлай. Ә һеҙ тәбиғәт, йәмғиәт алдында асыҡ көрәш шарттарына ҡуйылғанһығыҙ. Был хәләтегеҙҙе нисек баһалайһығыҙ?**

**Эльбрус Ниғмәтуллин:** Тап ошо беҙҙе көслөрәк итә лә инде. Баяғы ҡойма тураһында әйткәйнек бит әле. Дәүләт - тап ошо ҡойма ла инде. Беҙҙе һаҡлаясаҡтар, беҙҙең телевидениебыҙ, гәзит-журналдарыбыҙ бар, уҡырға ингәндә ниндәйҙер өҫтөнлөктәр бирелә, тип тынысланырға һәм бер нәмә лә эшләмәҫкә мөмкин. Ә республиканан ситтә быларҙың береһе лә юҡ, киреһенсә, барыһын да үҙеңә яулап алырға тура килә. Әлбиттә, бындай шарттарҙа юҡҡа сығыуың да ихтимал. Әммә мин, беҙ юғалып ҡалманыҡ һәм иң ауыр ваҡыттарҙы үттек, тип иҫәпләйем. Иң мөһиме, ваҡыт һынауын үтеп, үҙебеҙҙе лайыҡлы күрһәтә алдыҡ. Эйе, беҙ, мәҫәлән, минең кеүек, стронгмен, армрестлинг, пауэрлифтинг һымаҡ сит спорт төрҙәре

***✓ Милләттәштәребеҙ araһында бар йәһәттән дә көслө, улар менән маҡтанырлыҡ, ғорурланырлыҡ шәхестәр булырға тейеш. Ул сағында башҡорт булмағандар ҙа, мин башҡорт, тип әйтәсәк.***



# ҺЫЙЫНАЛАР,

## имиджы тураһында

менән шөғөлләндек, әммә башҡорт булып ҡалдыҡ.

**▸ Әгәр ҙә башҡорт аңлы рәүештә үҙенең милләтенән баш тарта икән, был күренеште нисек аңлатырға була? Беҙҙең республиканың көнбайышында ла бындай проблема бар бит? Был көсһөҙлөкмө, әллә, киреһенсә, һинең көслө булыуыңды күрһәтәме?**

**Эльбрус Ниғмәтуллин:** Беренсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында, башҡортса таҙа һөйләшкән, ҡурайҙа уйнай белгән кеше генә башҡорт тип иҫәпләнә, тигәйнеләр. Шунда ирекһеҙҙән, бәй, беҙ бит башҡорт түгел, тип уйлап ҡуйҙым, сөнки унда тәҡдим ителгән башҡортлоҡто белдереүсе ете пункттың өсәүдүртәүһе генә беҙгә тура килә, етмәһә, өлкәлә тел өйрәнеү менән проблемалар бар ине. Ул күҙлектән ҡараһаң, Силәбелә башҡорттар бөтөнләй юҡ кеүек. Һуңғы ҡоролтайҙа Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов сәхнәнән, кем үҙен башҡорт тип иҫәпләй - шул башҡорт, тигәс, күңелгә рәхәт булып китте. Тимәк, ун биш йыл эсендә беҙ шуны аңлау хәленә еткәнбеҙ, күпмелер ваҡыт үтеү менән хәл тағы ла яҡшырасаҡ, тип ышанам. Ғөмүмән, милләтте дөрөҫ булған һәм дөрөҫ булмаған милләткә бүлгеләү бер ҡасан да яҡшыға алып килмәй. Әгәр кеше башҡорт булып та уны башҡалар башҡорт итеп танымай икән, ул тәбиғи рәүештә кемгәлер ҡушылырға мәжбүр була.

Беҙ һәр ваҡыт терәлер өсөн көслө иң эҙләйбеҙ. Кешенең тәбиғәте шулай - ул көслө кеше менән бергә булырға ынтыла. Шуға ла тағы берҙе ҡабатларға мәжбүр булам - милләттәштәребеҙ араһында бар йәһәттән дә көслө, улар менән маҡтанырлыҡ, ғорурланырлыҡ шәхестәр булырға тейеш. Ул сағында башҡорт булмағандар ҙа, мин башҡорт, тип әйтәсәк.

**Флүзә Ғайсина:** Силәбе башҡорттары ҡоролтайы рәйесе булып әлеге көндә Марсель Йосопов эшләй. Ул арҙаҡлы шәхес Харис Йосоповтоң улы, Силәбелә Харис Монасип улын хөрмәт итмәгән кеше юҡ. Уның улдары ла ҙур уңышҡа өлгәшкән кешеләр, Марис - РФ Билбау көрәше федерацияһы президенты, Марсель - РФ Дәүләт Думаһы депутаты. Шуға ла өлкәлә ҡоролтайға ҡарата ла ҡараш яҡшы, сөнки унда абруйлы шәхестәр эшләй.

**Эльбрус Ниғмәтуллин:** Ысынлап та, Силәбе өлкәһенең халҡы башҡорт милләте тураһында Марсель, Марис Йосоповтарҙан, минән, Флүзәнән һәм башҡаларҙан сығып фекер йөрөтә. Ҡоролтай эшләй, күп төрлө саралар үткәрә икән, уларҙың үҙ олигархтары бар, тип уйлай. Бында иң ҡыҙығы шунда, кешеләр хәҙер беҙҙән ниндәйҙер матди ярҙам алып була, тип уйлай һәм төрлө проекттар менән мөрәжәғәт итә, минең аша Марсель Йосопов менән бәйләнешкә сығырға теләүселәр күбәйә. Бәлки, мин Марсель Йосоповто үҙем дә улар кеүек үк телевизорҙан ғына күрәмдер, әммә, халыҡтың уйынса, минең ҡулдан барыһы ла килә һәм мин миллионлы проекттар менән эш итәм. Беҙ үҙебеҙҙе көсһөҙ, тип уйлайбыҙ, тик беҙҙең турала халыҡ улай уйламай.

**▸ Бөгөнгө көнгә тиклем башҡорт аристократы тигән вакантлы урын буш тора, беҙҙә буржуазия ҡатламы юҡ, башҡорт миллионерҙары бар, әммә улар бик әҙ. Әгәр ҙә башҡорт булыу модалы, тигән идеяны тормошҡа ашырырға теләһәк, башҡорт аристократияһы ла булырға тейеш, был мотлаҡ шарт. Һеҙ был турала нимә уйлайһығыҙ?**

**Флүзә Ғайсина:** Һәр ваҡыт матди яҡтан бай кеше рухи яҡтан бай тигәнде аңлатмай. Тап ошо матди һәм рухи байлыҡ араһындағы тигеҙһеҙлек диссонанс тыуҙыра һәм шуға ла бындай кешеләрҙе аристократ тип һанап булмай. Ысын аристократ ул үҙе тураһында ғына түгел, башҡалар тураһында ла уйлай, үҙенең матди байлығын халҡы өсөн тотонорға йәлләмәй, йәғни ул үҙен генә түгел, ә үҙенең милләтен, мәҙәниәтен алға этәрә. Ә ундайҙар беҙҙең арала бик һирәк булһа ла бар. Мәҫәлән, Марсель Харисович йылына бөтә мәҙәни-милли ойошмаларға өлкә бюджеты күләмендә, хатта күберәк тә аҡса тотона. Әммә уның кеүек кешеләр күбәйһен өсөн күпмелер ваҡыт үтергә тейеш.

**Тимур Сафиуллин:** Ҡалала бай башҡорттар бар ул, тик уларҙың күбеһе бындай йәмәғәт ойошмалары, уларға ниндәйҙер ярҙам кәрәклеге хаҡында бөтөнләй хәбәрҙар түгел. Мәҫәлән, беҙ башҡорт йәштәре берлегенең офисын булдырыу тураһында уйланып, ниндәйҙер эшмәкәрлек башлағас та бер төҙөлөш фирмаһының директоры, әйткәндәй, үҙебеҙҙең милләттәшебеҙ төҙөлөш материалдары менән ярҙам итәсәген белдерҙе. Йәғни, беҙ тәүҙә үҙебеҙҙе, үҙебеҙҙең әүҙемлекте, унан һуң ниәттәребеҙҙең изге икәнлеген күрһәтә алдыҡ һәм ярҙам итеүсе лә табылды. Бындай кешеләр үҙҙәрен рекламаларға ла теләмәй, кем ярҙам итеүе тураһында һөйләп йөрөүебеҙҙе лә һорамай. Йәғни, уңышҡа ынтылыусыларға кешеләр үҙҙәре лә ярҙам итергә әҙер тора, тик үҙегеҙҙе күрһәтә генә белегеҙ.

**Эльбрус Ниғмәтуллин:** Быны менән тулыһынса килешәм. Бөгөнгө көндә минең эргәмдә лә, һиңә ярҙам итергә теләйбеҙ, тиеүселәр байтаҡ. Һеҙ бит мине белмәйһегеҙ, тием, беләбеҙ, күҙәтеп барабыҙ, теге йәки был мәсьәләгә ҡарата фекерҙәрең оҡшай, беҙ уларҙы уртаҡлашабыҙ, тип яуап бирәләр. Беҙҙең хәҙер төп маҡсат - ошо кешеләрҙе берләштереү, сөнки күберәк осраҡта улар хатта бер-берен дә белмәйҙәр.

**▸ Ҡасандыр Салауат Юлаевты "яуыз, бур", тип атағандар. Хәҙер уның исемен йөрөткән хоккей командаһы Евразия чемпионы булғас, Салауатты язалап йөрөүселәрҙең вариҫтары "Салауат - чемпион!", тип ҡысҡыра. Хоккейсылар араһында башҡорттар булмаһа ла, Салауаттың исеме дөйөм милли идея кимәленә күтәрелде. Тимәк, спорт халыҡтарҙы берләштереүсе идея була ала. Ошоно артабан нисек үҫтерергә була?**

**Эльбрус Ниғмәтуллин:** Спорттың милләте юҡ, унда дөйөм ҡағиҙәләр генә бар һәм унда кем көслө, шул еңә. Шулай ҙа ул ысынлап та берләштереүсе идея булараҡ сығыш яһай ала. "Салауат Юлаев" командаһында башҡорт егеттәре булһа, яҡшыраҡ булыр ине, әлбиттә, тик әлегә Салауат Юлаев бренды бар - был да һәйбәт. Ә тарихҡа килгәндә, белеүебеҙсә, тарих шул дәүергә, ул ваҡытта идара иткән батшаға яраҡлаштырып яҙыла. Нисәмә быуаттар буйына исеме тыйылып килгән Салауаттың ниндәй яҙмышҡа дусар булыуын беҙ әле генә беләбеҙ. Шулай ҙа уны һаман бур, тип атаусылар бар әле. Мәҫәлән, яңыраҡ Беренсе каналда, Александр Гордон тапшырыуында сығыш яһағайным, шунда ла ишетергә тура килде бындай һүҙҙәрҙе. Унда беҙ режиссер Светлана Проскуринаның "Перимерия" фильмын ҡараныҡ. Унда бер эпизодта башҡорттар күрһәтелә. Урлашыуҙа тотолған башҡортто участка милиционеры бәйләгән һәм унан һорау ала. Был ваҡытта башҡорт нимә эшләй? Әлбиттә, ҡаршылаша һәм үҙенә тағылған ғәйепте танымай. Аҙаҡтан уның бер ниндәй ҙә бандит булмағанлығы асыҡлана. Әйткәндәй, унда миңә татар милләтен дә яҡларға тура килде. Бына шуға ла Үҙәк каналдарҙан күрһәтелгән тапшырыуҙарҙа милләтебеҙ тураһында ялған мәғлүмәт яңғырамаһын өсөн беҙ унда ла сығыш яһарға тейешбеҙ.

**▸ 70-се йылдарҙан алып 90-сы йылдарға тиклем башлыса көньяҡ райондарҙа йәшәүсе 300 мең башҡорт Себергә һәм башҡа ерҙәргә киткән. Бына парадокс: башҡорт Башҡортостанда көслө түгел. Шуға ла бизнеста иң ҙур уңыштарға өлгәшкән башҡорттарҙың барыһы ла ситтә йәшәй. Бик етеш йәшәгән Ырымбур фермерҙарын күргәнем бар, бына һеҙ, көслө силәбеләр ҡаршыбыҙҙа ултыра. Улай булғас, милләтте һаҡлап ҡалыу өсөн бөтә нәмәне лә эшләүсе дәүләт механизмы ни өсөн беҙҙе көсһөҙләндерә?**

**Эльбрус Ниғмәтуллин:** Беҙ тағы ла конкурентлыҡҡа һәләтле булыу кәрәклегенә әйләнеп ҡайтабыҙ. Иң көслө эшҡыуарҙар ситтә, тинек. Әлбиттә, улар бар ауырлыҡтарҙы еңеп, аяҡҡа баҫҡас, бөтә донъя улар тураһында һөйләй һәм беҙ уларҙы беләбеҙ. Ә ошо 300 мең башҡорт араһында юғалып ҡалған, ассимиляцияға бирелгәндәре әллә күпме бит.

**Тимур Сафиуллин:** Башҡортостанда тағы ла шундай проблема бар: бында башҡорт үҙ милләте эсендә генә түгел, ә уларға ҡаршы агрессив көйләнгән башҡа милләттәрҙән торған тышҡы мөхиттә лә конкуренцияға һәләтле булып ҡалырға тейеш. Тарихыңды, үҙеңдең тамырҙарыңда белеү һине көслө итә, тиҙәр. Бына ул беҙҙе, ситтә йәшәүселәрҙе көслөрәк итә, сөнки беҙ уны ҡулланырға тырышабыҙ. Ә Башҡортостанда университетта яҡшы өлгәшеү, ниндәйҙер проект яҡлау, гранттар яулау, конкурстарҙа еңеп сығыуға ынтылыу урынына тарихты һөйләү менән генә сикләнәләр.

**Эльбрус Ниғмәтуллин:** Мин быларҙың барыһы ла ваҡытлыса күренеш, тип уйлайым. Милләтебеҙ әлегә үҫеш юлында, әлегә беҙгә масштаблылыҡ етешмәй: үҙебеҙҙең ауылыбыҙ, ҡалабыҙ, республикабыҙ эсендә генә ҡайнап йәшәргә күнеккәнбеҙ.

**(Дауамы 15-се биттә).**

***Административ-территориаль бүленеш бар һәм беҙ хәҙерге заман шарттарында был сиктәрҙе үҙгәртә алмаясаҡбыҙ. Ә, ғөмүмән, Силәбе башҡорттары ҡайҙа йәшәгән, шунда ҡалырға тейеш, тип иҫәпләйем. Айырым райондарҙы түгел, ә тотошлай өлкәне Башҡортостанға ҡушыу республика өсөн яҡшы булыр ине. Ул сағында был территорияның үҙәге ҡайҙа булыуы - Силәбеләме, әллә Өфөләме - мөһим түгел, башҡорттар өсөн тарихи Башҡортостандың бер өлөшө кире тергеҙеләсәк. Быға беҙ шат ҡына буласаҡбыҙ. Силәбе өлкәһенең Арғаяш районында башҡорттар бөтә халыҡтың 64 процентын алып тора, шуға ла беҙ бында үҙебеҙҙе сит ерҙә йәшәгән кеүек тә тоймайбыҙ. Хакимиәт тә, унда йәшәгән халыҡ та башҡорттоң бында аҫаба халыҡ икәнен белә, ауылдарыбыҙҙың, башҡа ер-һыуҙарыбыҙҙың атамалары ике телдә яҙып ҡуйылған, мәктәптәрҙә лә алтаҡталар ике телдә. Силәбенең Арғаяш районын хатта Бәләкәй Башҡортостан тип атарға ла була.***

✓ *Кемгә нисектер, әммә Мансурға ул кешнәү түгел, ә мыҫҡыллы ихахай булып ишетелде. Чубайстарға ҡалған заман шул инде: быныһы ни ҙә, бөтә Рәсәй халҡын мыҫҡыл итеп көлгән ерән шайтаны ни!*



7

"Минә барыбер" тигән ымға ышыҡланып, сер бирергә теләмәһә лә, Мансурҙың күңеленә шик төштө шулай ҙа. Әллә ни күп миҡдарҙа ла түгел, әммә тора инде шунда йөрәкте өйкәп, йәнде үртәп. Донъяла йәшәп-йәшәп, ғүмерҙә улай булғаны юҡ ине. Был нимә, олоғайыу ғәләмәтеме? Улай тиһәң, ололарҙың һынамышы буйынса, уның әле иң ҡеүәтле сағы. Етмәһә, кискә табан тел сарларға килгән Зәһит утҡа май һибеп китте. Иртәгә буласаҡ тамаша өсөн ихатала ҡороҡ һабы йүнәтеп йөрөгән Мансур менән ҡәҙимгә ауыл хәлдәре, көндәҙгә тәьҫораттар тураһында һөйләшеп бөткәндән һуң:

- Мужыт, икенсе бер атты өйрәтерһең? - тине ул - Өйөрҙә ҡонандар ҙа күренештерә. Ярамағанмы нимескә...

Намыҫтың бер тоҡанһа һүрелмәй торған хис икәнен әйткәйнек инде. Былай саҡта ла алдына алғанын ҡуймай торған Мансурмы һуң инде сигенә торған кеше? Шуға күрә беҙ уның:

- Аунағас, бейек агастан аунар кәрәк, - тип яуап бирерәнә шикләнмәй ҙә инек.

Дуҫтарҙың бер-береһен мәрәкәләүҙә ярышыуын, ошо шөғөлдән ләззәт һәм йәм табып йәшәүҙәрен аҫәрҙән башында аңғарта бирэп ҡуйғайныҡ инде. Шуға күрә, Зәһиттың:

- Иртәгә иртүк ҡәбер ҡаҙа торайыҡмы әллә? - тигән ҡара тәләкәһен быйылғы йылдың иң уңышлы шаяртыуы иҫәбенә индерергә кәрәк. Мансур ҙа бирешергә теләмәне, ләкин уның:

- Һай, хәстрүш! Елкәнә ҡороҡ һабы эләкмәҫ борон, тай бынан! Ике йөҙ илле евро алам, тип ҡыуанып ҡына йөрөгәндә, әрәм булырһың, - тип әрепләшеүе Зәһиттың тәләкәһенән күпкә ҡайтыш икәнен танымай булмай.

- Һи-и, лутсы үҙеңде ҡайғырт, - тине ҡайтыу яғына ыңғайлаған Зәһит.

"Ни булһа ла булыр, - тип уйланы түбәлек өҫтөнән ҡуптарып алынған һырғый ҡыуалға ҡороҡ арҡаны беркетеп бөткән Мансур. - Әйткән һүҙ - атҡан уҡ". Әлбиттә, йәшерәк саҡта мөнгегә ат өйрәткәне булды уның. Был ғәмәлдең ата-бабаларҙан ҡалған тәртибен дә онотмаған. Ләкин уға ни заман хәҙер! Егерме йыллап ваҡыт үтеп киткән - уйлаһаң, уйылып китерлек! Әллә өйөр айғырына яҫҡынып яңылыштымы? Зәһит әйтмешләй, йылҡы араһында ҡарыуыҙыраҡтары ла бар. Әммә шик-шөбһәле уйҙары ошо тәңгәлгә етһә, уның күҙ алдында ҡыуаныстан бала һымаҡ һикергеләп торған Эльза пәйҙә була. Өләсәһенең иҫтәлеген мәңгеләштерәм тип анау хәтле ерҙән килгән кешенең күңелен нисек төшөрмәк кәрәк? Етмәһә, ҡыҙ бала.

Мансурҙың был төндәге йоҡоһон йоҡо тип әйтеп булмай. Иртәрәк ятып, оҙағыраҡ йоҡлау ниәтенән телевизорҙы ҡарау түгел, ҡабыҙып та тормағайны, әллә шул кире тәьҫир итте инде? Булыуы ихтимал, нисәмә йылдар буйы төңкәләп ҡарауҙан ысын мәғәнәһендә әфйүнгә әүерелгән бит ул. Шуны ҡабыҙһаң, дарыу эскән һымаҡ йән тынысланһа, экрандан ағылған музыка һәм лабырлобор һөйләшеү тәьҫиренән изрәп, телевизорҙы һүндермәй йоҡлап та китәһең ҡай саҡ. Ә бына бөгөн күҙенә йоҡо эленмәй ҙә ҡуя. Инде серемгә талдым тигәндә, йә "Ҡәбер ҡаҙа торайыҡмы әллә?" тип теш ыржайтып торған Зәһит күҙ алдына килә, йә мәсхәрәле рәүештә ҡойроғон ҡалҡытып эсен бушатҡан Чубайс пәйҙә була. Уларҙан арыныуға, уй дарьяһын Эльза биләп ала. Ул төрлө һында көүҙәләнә: тау-таш араһында йүгерә, операторға күрһәтмәләр биреп ишаралар яһай, ҡыуанысына баш була алмайынса, торған урынында һикергеләй. Ҡыҫҡаһы, ул әүен баҙарына таң алдынан ғына юллана алды...

Әммә егеттең шик-шөбһәләре бушҡа булып сыҡты, сөнки... Туҡта, ә нинә беҙ ҡабаланабыҙ әле? Был ваҡиғаны нисек булған, шул көйө баштан тасуирлап ҡарайыҡ. Йөҙ тапҡыр ишеткәнгә ҡарағанда, бер тапҡыр күреү яҡшыраҡ, тиҙәр бит. Ана, һәр көндәгесә, ҡумыҙ һымаҡ ҡына геүләп, Ҡорьятмаҫ тауының көнсығыш итәгенә автофургон килеп туҡтаны. Унан ҡояш кеүек балҡып Эльза һикереп төштө, ҡыҙ артынса аппаратураһын һөйрәп - оператор. Ул арала Эльзаның:

- Мансур, башланыҡ! - тигән шат тауышы тау битләүҙәренә ҡағылып, шаңдау булып тирә-яҡҡа таралды. Шуны ғына көтөп торған Мансур һәм уға ярҙам кәрәк була ҡалһа, тип атҡа менгән Зәһит, шарт та шорт сыбыртҡы шартлатып, ҡыйҡыулап, өйөрҙө автофургон туҡтаған тарафҡа әйҙәй башланылар. Сценарий буйынса Мансур, өйөр менән бергә сабып барған Чубайсты ҡыуып етеп, уға ҡороҡ һалырға тейеш. Унан һуң инде төп тамаша - ат өйрәтеү башлана. Бына, йылҡы өйөрө, йән-фарман елеп, алыҫтан уҡ был күренеште төшөрә башлаған операторға яҡынлашты. Барыһы ла алдан уйлағанса яҡшы ғына булһын инде, сөнки Эльза егеттәрҙе лә, операторҙы ла: "Дубль булмаясаҡ", - тип иҫкәртеп ҡуйған. Ысынлап та, бер уҡ атты ике тапҡыр мөнгегә өйрәтеп булмай бит инде.




Бына Мансур, өйөрҙөң һыртындараҡ сапҡан айғырҙы ҡыуып етеп, уның муйынына ҡороҡ боғалаһын кейҙерҙе. Ҡалғаны ата-бабаларҙан килгән тәртип буйынса: мөнгән атындың башын шаҡарып, тиҙлеген кәметә төшәһең. Тартылыуҙан боғалаҡ ҡыҫыла ла, тоторға теләгән малдың муйынын һыға башлай. Тын юлы быуылған йылҡының туктамайынса сараһы юҡ. Әлбиттә, буй бирер алдынан ул йән көсөнә тулай, сапсына, үрле-ҡырлы һикерә. Шулай инде, ирек һәр йәнгә ҡәҙерле.

Әммә шул саҡта һис көтөлмәгән хәл булды: ҡороҡ боғалаһы муйынын ҡыҫыр-ҡыҫмаҫтан өйөр айғыры күндәм генә туҡтаны. "Быны бағындырыуҙары - ай-һай! Үҙемде эйәрҙән һөйрәп төшөрмәһә ярар ине", - тип шөбһәләнеп килгән Мансур был хәлгә ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәне. Шулай ҙа, ҡороғон ҡулынан ысҡындырмайынса, атынан төштө. Уғаса булмай, ҡороҡ һабына ай-һайлап Зәһит килеп йәбеште. Тик егеттәр быға аҗарланып, ер тырнап йөрөгән айғырҙың тыныс ҡына тороуына аптыраны.

- Нинә туламай икән, әй? - тип һораны ҡыуалды ҡыҫып тотҡан Зәһит.

- Бер-бер хаслыҡ уйлап тора шикелле, - тине Мансур.

- Мал әйәһенә оҡшамаһа, харам була, ти. Аҫтыртын, хәйләкәр икәне күренеп тора ҡәбәхәттең.

- Әллә хужаһына, әллә аҙашына оҡшаған... Һин тотҡас тот, мин хәҙер йүгәндә...

Мансур менеп йөрөгән аты өҫтөндәге эйәр ҡашына элеүле йүгәнде алып килгән арала Чубайс һаман муйынын ҡыҫҡан ҡороҡ һабына сыторман йәбешкән Зәһитҡа боролоп ҡараны, һуңынан, баҫтырыуҙан ҡасып, тау битенә һибелгән өйөр тарафына ҡарашын төбәп, еңелсә кешнәп ҡуйҙы. Аттар телен аңламағас, уның ни уйлап, ни әйтергә теләгәнен белеп булмай, шулай ҙа айғыр Зәһитҡа күҙ һирпкән арала:"Һи-и, бахыр, шунан башҡа эшең юҡмы ни?" - тип әйтергә уҡталғандай итте шикелле. Ә уның өйөргә тәғәйенләнгән һуҡраныу ҡатыш кешнәүен: "Күрәһегеҙ бит, бынау ике елғыуар тотҡарланы. Хәҙер барып етермен", - тиеберәк аңларға була ине.

Бына Мансур, былай ҙа тик торған малға тамаҡ төбөнәнерәк сыҡҡан тауыш менән: "Тр-р, тр-р!" - тип, тартылған арҡанға тотона-тотона иплап кенә айғырға яҡынлашты. Йәнәһе, кинәт биленләп китмәһен өсөн йүнәләй, сөнки ул Чубайстың былай тороуын дауыл ҡуптарыр алдынан ҡорған мәкере тип уйлай ине. Ышан атҡа - бына, хәҙер, хәлеңде хәлләп торор-торор ҙа, һыуҙан алынған балыҡ һымаҡ тулай башлар. Әгәр шулай була ҡалһа, ғәрәсәт ҡубасаҡ - ҡеүәтле бит, ҡәһәр төшкөр. Теләһә, анау хәтле кәүҙә менән уларҙың икеһен дә ҡороҡтары-уты менән һөйрәп алып китә ала.

Ләкин биленләп тулау, бигерәк тә, Мансур фаразлағанса, дауыл ҡуптарыу өйөр айғырының уйында ла юҡ ине шикелле - ул үҙенә яҡынлашырға, йүгәнләп ялынан һыйпарға ирек ҡуйҙы. Ғәҙәттә, ундай саҡта башына нуҡта һуғырға самалаған кешене йә үрәпсеп сапсырға, йә тешләргә тырыша аҫауҙар. Ә Чубайс йүгән кейҙереүгә лә битараф ҡалды, гүйә, инәһенән нуҡталы көйө килеп тыуған.

- Аллаға тапшырҙыҡ, - тине тулҡынланыуын йәшерергә тырышҡан Мансур. - Арҡанды ҡороҡ һабынан сис, мин ниткәс, ебәрерһең...

Уның "ниткәс" тигәнен дөрөҫ аңлаған Зәһит, Мансур айғырҙың мундаһына һикерер-һикермәҫтән, арҡанды ҡулынан ысҡындырҙы. Чубайс: "Күптән шулай кәрәк ине, юҡһа, тораһығыҙ баш ҡаңғыртып", - тигәндәй, башын сайҡап, ҡаты итеп бышҡырҙы ла, талағын үкһетә-үкһетә күндәм генә юртып китте.

Ахырғы сиккә тиклем шиктән арына алмаған Мансурҙың айғырға һикереп менер алдынан һуңғы уйы шул булды: "Был йәки шайтандан да хәйләкәр һәм мәкерле хайуан, йәки..." Ә инде Чубайс бер ни булмағандай талғын ғына өйөр яғына юртып киткәс, егеттең "йәки" тигән урында өҙәләп ҡалған икенсе фаразы дөрөҫләнде: ул өйрәтелгән атты мөнгегә өйрәтеп маташҡан! Хурлығы ни тора! Мансур үҙенең күңелен солғап алған ғәрлектән саҡ айғыр өҫтөнән ҡолап төшмәне. Ер йөҙөндә ҡырҡ дүрт йыл йәшәп, бындай мәсхәрәгә ҡалғаны юҡ ине. Хурлығы кемдән бит әле: әҙәм балаһынан түгел, ә беҙ аңһыҙ тип иҫәпләгән аттан! Өйөр айғыры саң уйнатып тулаһа, донъяға һыймай үрәпсеһә, Мансурҙы өҫтөнән атып бәрһә, хатта имгәтһә лә был ҡәҙәр ҡыйын булмаҫ ине. Етмәһә, был ваҡытта тау итәгендә тәгәрәп йөрөп көлгән Зәһиттың шарҡылдауы уның былай ҙа дөрләп янған йөрәгенә керәсин булып һибелде. Ҡасан онотолғансы Мансурҙың йәнен үртәргә етә ҡалды инде былай булғас. Өҫтәүенә, ҡәһәр төшкөр айғыр, өйөргә яҡынлашҡас, бейәләрен сәләмләгәндәй, йыһан яңғыратып кешнәп ебәрҙе: "И-и-hо-hо-hо!.." Кемгә нисектер, әммә Мансурға ул кешнәү түгел, ә мыҫҡыллы ихахай булып ишетелде. Чубайстарға ҡалған заман шул инде: быныһы ни ҙә, бөтә Рәсәй халҡын мыҫҡыл итеп көлгән ерән шайтаны ни!

Егеттең күңелен аҙ-маҙ йыуатҡаны - был ваҡиғаға Эльзаның ҡарашы ине. Уныңса, бөтәһе лә яҡшы, иң экзотик кадрҙарҙың береһе буласаҡ ул. Өйөр айғыры өйрәтелгән булып сыҡтымы ни? Булһа һуң! Иң мөһиме - Мансурҙың йөрәге етеп, уны ҡороҡлауы. Ә ҡалған яғын киҫеп ташларға, монтажларға була - кино сәнғәтенең мөмкинлектәре сикһеҙ. Шуға күрә, көйөнөрлөк бер ни ҙә юҡ...

Ҡыҙ улай ти ҙә бит, тик бынау үрһәләнгән намыҫ менән нишләргә? Эстә ниҙер яна, оят, ғәрлек, сәм тойолары бергә ҡушылып урғый. Бөгөнгә хәлдең шулай килеп сыҡҡанына бер кем дә ғәйепле түгел, ә шулай ҙа...

- Кеше малын кем белә, - тине Мансур аҡланған ҡиәфәттә. - Бигерәк тә Ғәлиулла һымаҡ хиреҫтең малын. Йәнәһе, бераү боронғоса эш итә.

- Боронғоса? - тип һораны үҙен дә ниндәйҙер кимәлдә ғәйепле тойоп, егетте нисек тә йыуатырға тырышҡан Эльза. - Ул нисек була?

- Элегерәк беҙҙең ата-бабалар, өйөр айғырын мөнгегә өйрәтеп, урман араһындағы йәйләүҙә туҙып киткән бейәләрҙе уға атланып табыр булған. Өйөр инстинкты инде.

- Аңлашыла-а, - тип һуҙҙы ҡыҙ. - Ҡара әле, Мансур, беҙҙең бындағы эш бөттө, тиһәң дә була. Ҡайтырға ла ваҡыт етте. Иртәгә юлға сығырға уйлайбыҙ. Һеҙгә ҙур рәхмәт - өләсәйем тураһындағы фильмға ошо ерҙең рухын өрҙөгөҙ, биҙәк өҫтәнегеҙ. Фильмды ҡороп бөткәс тә мотлаҡ бер копияһын дискыға яҙҙырып ебәрермен. Беҙ хәҙер Верхнеурал ҡалаһына китәбеҙ - унда тағы бер нисә кадр төшөрөргә кәрәк. Унан һуң район үҙәгенә - музей кейемдәрен тапшырырға тейешбеҙ. Ҡайтышлай мал хужалары менән иҫәпләшеп сығырға кәрәк...

- Шунан? - тип уны бүлдерҙе кәйефе күтәрелә төшкән Мансур.

Эльза был һүҙҙе егет ауыҙынан тәүгә ишетмәй. Бигерәк тә Зәһитты мәрәкәләр алдынан йыш яңғырай ине ул. Шуға күрә, ҡыҙ Мансурҙың ярым шаяртыулы тонына яраҡлашып, көләмһерәй биреп:

- Шунанмы? - тине. - Шунан кис көнө ауылдағы бераүгә ҡунаҡҡа барабыҙ. Ул сәй ҡайнатып торһа, һәйбәт булыр ине. Һин уға әйтмәҫһеңме икән?

Үҙе шаяртырға яратҡан кеше мәрәкәләгәндә аңламай тиҙәр, дөрөҫ икән. Ана, Мансур ҙа был һынамыштың хаҡлығын раҫлап, етди төҫ менән:

- Нинә әйтмәҫкә? Кем һуң ул? - тип торған була.

- Мансур. - Шулай тине лә Эльза, егет ни ҙә булһа аңлап өлгөргәнсе, автофургон яғына ыңғайланы. Бына, шыуҙырмалы ишек тауыш-тынһыҙ ғына ябылып, музей кейемдәрен тотоп баҫҡыстан күтәрелгән ҡыҙҙың һынын йәшерҙе. Автофургон, еңелсә көрһөнөү ауазы сығарып, тирә-яҡҡа ҡапыл күкһел төтөн бөрктө лә, Верхнеурал тарафына йүнәлде.

**(Дауамы бар).**

***✓ Беҙҙе Тываға Халыҡ-ара тере музыка һәм иман фестивalenә саҡырҙылар. Унда донъяның төрлө яҡтарынан йыйылған 50 төркөм араһында "Тыуған ил тураһындағы йырҙар" номинацияһында беренсе урын яуланыҡ.***

*ИЖАДХАНА*

# АРҒЫМАҠ АТ ЮЛ БАШЛАР...

## аҡыллы егет ил башлар

**Бөгөнгө геройыбыҙ Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры Зөлфәр Әхмәтовты баш ҡала тамашасыһы йәштәр өсөн ойошторолған төрлө проекттар авторы, режиссер булараҡ та таный. "Бишбармаҡ" беренсе төрки телле хип-хоп фестивале, "Реалити-шоу: дүрт йөрәк" кеүек үҙенсәлекле тамашаларҙың фекерләй белгән, халҡының киләсәге өсөн битараф булмаған йәштәрҙе бергә туплай алыуын иҫәпкә алғанда, Зөлфәрҙе, һис шикһеҙ, бөгөнгө заман геройы тип тә атап булыр ине. Ошо арала буласаҡ "Арғымаҡ" этно-рок төркөмөнөң концерты быны ысынлап та шулай булыуын тағы бер тапҡыр раҫламаҡсы. "Арғымаҡ ат юл башлар, аҡыллы егет ил башлар", ти халыҡ, "Арғымаҡ" продюсер үҙәге директоры, Рәсәй каскадерҙар ассоциацияһы ағзаһы Зөлфәр ӘХМӘТОВ менән әңгәмәбеҙ "Арғымаҡ" төркөмө тураһында һәм, әлбиттә, геройыбыҙҙың етмеш ете үк булмаһа ла, күп төрлө һөнәрҙәре хаҡында булыр.**



### "Арғымаҡ" - аң, рух, ғәм...

Бер тапҡыр осраҡлы ғына рәүештә театрҙа бергә эшләгән хеҙмәттәшемдең Тыва республикаһының "Ятха" төркөмөн тыңлағанын ишетеп ҡалдым. Баҡтиһәң, тормошта бер нәмә лә осраҡлы ғына булмай икән. Был төркөмдөң ижады менән танышып, уларҙың оҫта өзләүен тыңлап, хайран ҡалып йөрөй торғас, этник музыка ҡоралдарына бай булған башҡорттоң ниңә шундай төркөмө булмаҫҡа тейеш, тигән уй тыуҙы. Венер Камалов менән Өфө сәнғәт училищеһы студенттарын йыйып, уларҙың вокал һәләттәрен, йырлау стилдәрен тыңлап ҡараныҡ, тик ниңәлер эш алға китмәне. Ул саҡта Милли йәштәр театрының әҙәби бүлегендә Нәфисә Тулыбаева эшләй ине. Уға инһәк, өҫтәлендә Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ" китабы ята. Шунда уҡ төркөмдөң исеме "Арғымаҡ" булырға тейеш, тип, был китапты уҡып сыҡтым һәм яңы көс менән төркөм төҙөү эшенә тотондоҡ. Әгәр ҙә һин нимәгәлер өйрәнергә теләһәң, юлыңа был эштә ярҙам итә алырлыҡ кешеләр сыға башлай - был Йыһан ҡануны. Зөһрә Бураҡаева менән ошо осорҙа таныштым, ул мине һәләтле йәштәр менән осраштырҙы. Театр директоры Ринат Ишмуллин бүлмә бирҙе һәм беҙ сәнғәт академияһы студенттары Шәһит Хамматов, Ринат Рамаҙанов, Марсель Әмәкәсов менән "Ятха"ның дискыһын тыңлап, этно-рок стилендә эшләй башларға ниәт иттек. Ҡурай, ҡыл-ҡумыҙ, думбыра һәм башҡа халыҡ ҡоралдарын рок музыка ҡоралдары менән берләштереп уйнауҙан былай ҙа бик үҙенсәлекле яңы яңғыраш барлыҡҡа килә, уға өзләү һәм вокал да ҡушып ебәрһәң, бигерәк тә шәп, йәштәргә лә, ололарға ла оҡшай. Төркөм ойоштороп йөрөгән ваҡытта "Дүшәмбе" ижадханаһын асҡайныҡ һәм милли интеллигенцияға тәғәйенләнгән был клубта "Арғымаҡ" беренсе тапҡыр сығыш яһаны. Ошо уҡ йылда "Урал моңо" халыҡ-ара фестивалендә ҡатнаштыҡ һәм беҙҙе Тываға, Устуу-Хурээла үткән Халыҡ-ара тере музыка һәм иман фестивalenә саҡырҙылар. Унда донъяның төрлө яҡтарынан йыйылған 50 төркөм араһында "Тыуған ил тураһындағы йырҙар" номинацияһында беренсе урын яуланыҡ. Фестивалдә башлыса тыва, хакас, монгол, яҡут төркөмдәре ҡатнаша, улар бер-береһенә яҡын йәшәгәс, ижадтары ла оҡшашыраҡ. Ә беҙ унда беренсе тапҡыр милли ҡоралыбыҙ ҡурайҙы яңғыраттыҡ, шулай уҡ башҡарыу стиле менән дә айырылып торғанғамы, эргәбеҙҙән кеше өҙөлмәне. Фестивалдә оло тәжрибә тупланыҡ, үҙебеҙҙе күрһәттек, иң мөһиме, тыва халҡының үҙ мәҙәниәтенә, милли инструменттарына булған мөнәсәбәтен күрҙек. Унда өзләүҙе, милли инструменттарҙы һаҡлап ҡалыу ғына түгел, ә киләһе быуындарға тапшырыу һәм бөтә донъяға танытыу йәһәтенән күп эшләйҙәр.

### Продюсерлыҡ эше

Сит илдә һәр йырсының импресариоһы, продюсеры, менеджеры бар. Ижад кешеһе ижад менән генә шөғөлләнергә тейеш, концерттарға артистар саҡырыу, афишалар яһатыу, реклама эшләү, билеттар һатыу кеүек эштәр менән булыша башлаһа, ижад итергә уның мөмкинлеге ҡалмай. Шуға ла егеттәр менән бурыстарҙы бүлештек, Ринат Рамаҙанов - төркөмдөң художество етәксеһе, ә ойоштороу эштәре минең иңдә. Ҡыҙғанысҡа күрә, әлегә Башҡортостанда продюсерлыҡ тейешле кимәлдә үҫешмәгән, шуға күрә был юлды тәжрибәләр, ҡайһы берҙә хатта яңылышыуҙар аша үҙеңә һалырға тура килә. Нимәлер эшләйем, тип, абынып ҡолаған саҡтарҙа төндәр буйына йоҡлай алмай, нимәгә ул миңә был, тип тә уйлайһың. Үҙем дә ижад кешеһе булараҡ, театрҙа уйнау, академияла студенттар уҡытыу менән генә ҡәнәғәтләнеп йөрөй ҙә алам, тик шулай ҙа күңелгә нимәлер етешмәй. Пафослы ишетелһә лә, башҡортлоҡ, рух тигән нәмә бар бит әле, ана шул башҡортлоҡ күңелде өйкәп, милләт өсөн ниндәйҙер эштәр башҡарырға әйҙәп тик тора. Әлбиттә, Башҡортостанды, башҡорттарҙы ситтә танытырлыҡ бейеү ансамблдәребеҙ, ҡурайсыларыбыҙ, йырсыларыбыҙ бар, әммә "Арғымаҡ" кеүек төркөмөбөҙ юҡ ине. Икенсенән, беҙ моңобоҙ, йырҙарыбыҙ менән милләттәштәребеҙҙең аңын уятырға тейешбеҙ. "Мин башҡортмон бит әле", тигән уй баланың аңына бәләкәйҙән һалынырға тейеш. Ошо бөтә факторҙар мине продюсерлыҡ менән шөғөлләнергә этәрә лә инде. Әлегә бер ниндәй коммерция маҡсаты юҡ, бөтәһе лә үҙебеҙҙең инициатива-ла, энтузиазмда тотоноп тора. Төрлө саҡтар булып китә, шулай ҙа беҙ һаман ат өҫтөндә һәм беҙ алға ҡарай юртабыҙ.

### Концерт һәм "шоу" тураһында

Төркөмдә быға тиклем состав алышынып торһа, хәҙер ул тейешенсә тупланып бөттө, ахыры. Төрлө урындарҙа сығыш яһап торабыҙ, үҙебеҙҙең генә тамашасыбыҙ ҙа барлыҡҡа килде, беренсе дискыбыҙҙы яҙҙырҙыҡ. Сит ерҙәрҙә сығыш яһау - бер, хәҙер инде үҙебеҙҙең ижадыбыҙ менән баш ҡала халҡын таныштырырға ниәтләнәбеҙ. Продюсер, режиссер булараҡ, был концерт тамашасыны хайран ҡалдырырлыҡ бер сара буласаҡ, тип әйтә алам. Беренсе өлөштә рок тематикаһы өҫтөнлөк алһа, икенсеһендә иң "тәмлеһе" - этник музыка яңғыраясаҡ. Бөгөнгө тамашасыны гитарала уйнап, сәхнәне биҙәү өсөн унда-бында ут йылҡылдатып ҡына йәлеп итеп булмай. Шуға ла махсус рәүештә ут оҫтаһы, декорациялар ҡороусы саҡырҙыҡ. Халыҡ төрлө "шоу"-ҙарға өйрәнеп бөттө. Мәҫәлән, спорт саралары, шул уҡ хоккей матчтары ла яҡшы итеп ойошторолған шоу бит. Тик шоуҙың ижади ҡәнәғәтлек килтереүе мотлаҡ. Башҡарыусы моңо, үҙен тотошо, энергияһы менән һәр тамашасының күңеленә үтеп инергә, уға эмоциональ яҡтан тәьҫир итергә тейеш. Шул саҡта зал менән энергетик бәйләнеш барлыҡҡа килә.

### Тамашасыны уйландыра алһаң....

Ниндәй генә һөнәрҙәр үҙләштерергә тура килмәһен, булмышым менән барыбер актер булып ҡалам. Республиканың Милли йәштәр театрына күберәк балалар һәм йәштәр йөрөй, йәш быуынды тәрбиәләүҙә беҙ ҙә яуаплы булыуыбыҙҙы гел иҫтә тотоп ижад итәбеҙ. Балалар һәм ололарға тәғәйенләнгән спектаклдәргә килгәндә, беренселәре өсөн уйнауы ауырыраҡ, сөнки ихлас булмаһаң, улар һине ҡабул итмәй, иғтибарын ситкә йүнәлтә башлай. Бөгөнгө заман балаһы телевизор ҡарай, интернетта ултыра, компьютерҙа төрлө сағыу төҫтәргә буялған, ваҡиғалар тиҙ үҙгәреп торған уйындар уйнай, шуға ла балалар өсөн тәғәйенләнгән спектаклдәр ҙә шундай булырға тейеш. Кескәй тамашасыға оҙон монологтар һөйләп тороп булмай, унда күберәк хәрәкәт итергә кәрәк. Һүҙ ҙә юҡ, спектакль тәү сиратта әхлаҡи тәрбиә бирергә тейеш, тик һин уны балаға аңлайышлы телдә еткерергә бурыслыһың. Йәштәр өсөн ҡуйылған спектаклдәр ҙә йәштәргә хас, йәштәр телендә булһа ғына отошло. Йәштәр театры сәхнәһе ниндәйҙер кимәлдә эксперименттар яһау урыны булырға тейеш. Сәхнәлә тамашасыға бөтөнләй ят ваҡиға уйнала икән, ул уны ҡабул итмәйәсәк. Мәҫәлән, Шекспирҙың Илнур Муллабаев ҡуйған "Ромео һәм Джульетта"һы йәштәргә оҡшаны, сөнки унда мөхәббәт темаһын заманса тематикаға һалып күрһәтә алдыҡ. Спектаклдең эстәлеге тамашасыға таныш булырға тейеш, ниндәйҙер геройҙа ул үҙен йәки танышын таный, шунан ассоциатив рәт китә. Актер тамашасы күңелендәге ниндәйҙер ҡылдарҙы ҡуҙғатып ебәрә алһа - бына шунда инде театрҙың ҡиммәте һәм баһаһы. Һөҙөмтәлә ул уйлана, дөрөҫ һәм дөрөҫ булмаған ҡылыҡтарын анализлай, кемделер рәнйеткәнен аңлап, унан ғәфү үтенә.

### "Башҡорттар китте һуғышҡа..."

Бәләкәй саҡта "Каскадеры, каскадеры" тип йырлап, ағастан-ағасҡа һикереп уйнап йөрөгәндә каскадер һөнәрен үҙләштерергә, кинола төшөргә тура килер, тип уйламай торғайным. Хәҙер мин хеҙмәттәштәрем Андрей Ганичев, Әсхәт Нәҡиев, Ринат Фәтхиев менән бергә Рәсәй каскадерҙар ассоциацияһы ағзаһы, сәнғәт академияһында фехтование ла алып барам. Беҙҙе был эшкә уҡытыусыбыҙ, ВГИК-тың сәхнә пластикаһы кафедраһы мөдире, профессор Айҙар Заһит улы Закиров саҡырғайны. Хәҙер каскадер булараҡ нисә һәм ниндәй фильмдарҙа төшкәнебеҙҙе теүәл генә итеп әйтә лә алмайым. Каскадер актер булырға тейештер, тип уйлайым, сөнки ҡайһы бер фильмдарҙа уйнап та ебәрергә кәрәк була. Төрлө хәүефле осраҡтар ҙа булғылай, мәҫәлән, А. Смирновтың "Жила-была одна баба" фильмында һыу баҫыу күренешен төшөрәбеҙ. Сюжет буйынса, мин һыуҙа болғанып киләм, бер батам, бер ҡалҡам. Һаҡлыҡ өсөн эстән гидрокостюм кейгәнмен, батмаҫ өсөн пенопласты ла мул ғына тултырғанбыҙ. Шунда һыу аҫтында ятҡан тимергә эләгеп, унан саҡ ысҡындым. Был эпизодты бер нисә тапҡыр төшөрөргә тура килде. Йылғаның шаулап ҡайнап ятҡан урынын ағып үтһәң, артабан ул тыныслана һәм һине шунда ҡотҡарыусылар кәмәһенә тартып сығарып ултырта. Фильм төшөргәндәрен ҡарарға килгән халыҡ ҡул саба һәм мин ҡысҡырып тороп "Башҡорттар китте һуғышҡа" тип йырлайым. Каскадерҙар төркөмөндәге егеттәр, башҡорттар йырларға ярата инде ул, маладис, тип көлә. Эстән генә, их, ошо ваҡытта ҡурайҙа һыҙҙырып ебәрһәң, ә, тип уйлайһың. Каскадерлыҡ менән шөғөлләнеү миңә адреналин бирә. Ҡайһы саҡта этюдтар эшләгәндә лә көтөлмәгәнсә уйнап ҡуяһың, актер телендә уны "от Лукавого" тиҙәр, бында ла ана шул "от Лукавого" барҙыр. Ошондай уҡ тойғоларҙы "Робин гуд"ты эшләгән саҡта кисергәнем булды. Рус труппаһы актеры Андрей Ганичев яҙған был пьесала һәр роль айырым актерҙы күҙ уңында тотоп, уның өсөн махсус тәғәйенләнеп яҙылған. Мин унда артыҡ һөйләшеп бармаусы Йософ Сарацынды уйнайым. Тәбиғәтем буйынса үҙемде шым кеше тип иҫәпләмәйем, һүҙҙе һирәк, әммә сәпкә тейҙерерлек итеп әйтеп ҡуя торған холҡом бар. Тиҙ ышанып барам, уҫал түгелмен. Театрҙа мине, ирешә белмәгән кеше, тип йөрөтәләр. Асыуланып һүҙ әйтә башлаһам, фекерҙәрем шунда уҡ тарҡала ла ҡуя йәки ҡысҡырып көлә башлайым. Шуға ла, бәлки, комедия жанры күңелемә яҡынырaҡтыр. Әммә ул минең ятраҡан жанрым һәм мин комедия уйнарға ятарам, тип әйтә алмайым. Бына мин төрлө кәпәстәр кейеп ҡараһам, миңә бөтә кәпәстәр ҙә килешкән кеүек, шуның кеүек комедиямы, трагедиямы - быныһы мөһим түгел, уларҙың икеһен дә уйнауҙың ауырлығы бер тигеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП....**

**Бөгөнгө заман геройы ниндәй булырға тейеш һуң? Герой бөтә замандар өсөн дә берәү инде ул. Көслө, ҡыйыу, ғәҙел һәм, иң мөһиме, халҡындың ғорурланырлыҡ улы бул, шул сағында халҡың һине лә яратыр, сөнки ат даны егет ҡулында булһа ла, егет даны үҙ ҡулында. Ә инде мондоң аңды, рухты уятыу һәләтенә эйә булыуын күрергә теләһәгеҙ, 19 майҙа Нефтселәр мәҙәниәт һарайына "Арғымаҡ" этно-рок төркөмөнөң тәүге концертына рәхим итегеҙ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Киләсәктә баш ҡалабыҙ янында ер алып, үҙ көсөм менән өй һалырға хыялланам. Йортомдоң нindәй булырын әле үк күҙ алдына килтерәм, уға үҙемдең бар оҫталығымды һаласаҡмын.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ДҮШӘМБЕ...

## йоманан башлана

■ Джорджия штатының Атланта ғалимдары белдереүенсә, үҙендең тирәягыңды гел генә таҙа тоторға тырышыу депрессияға килтерә. Яңыраҡ Британия ғалимдары был сәйер ғәҙәттәр исемлеген тағы ла тулыландырған. Лондондың Cranley клиникаһы дерматологы Ника Лоу әйтеүенсә, ҡулдарҙы йыш йыуыу ҙа насар, йылы һыу һәм һабын ҡул тиреһенең кибеүенә килтерә. Лафборо университеты профессоры Джим Хорн 8 сәғәттән күберәк йоҡламаҫҡа кәңәш итә, юғиһә, арыу тойғоһо барлыҡҡа киләсәк. Оҙаҡ йоҡлау урынына көндөҙ 4-15 минут серем итеп алыу файҙалыраҡ икән. Стоматолог Фил Стеммер теште таҙартҡандан һуң ауыҙҙы һыу менән сайҡайтыуҙы ла насар ғәҙәткә һанай, сөнки теш пастаһының файҙалы матдәләре йыуыла. Бынан тыш, ашағандан һуң тештәрҙе йыуырға ярамай, аҙыҡ-түлек теш эмален йомшарта һәм уға кире үҙенең элекке хәленә ҡайтыу өсөн ярты сәғәт тирәһе ваҡыт кәрәк.

■ Американың Миннесота университеты тикшеренеүселәре күршеләр менән татыу йәшәргә саҡыра. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашҡан алты мең оло йәштәге кешене тикшереп, улар шундай һығымтаға килгән: оло йәштә бар кеше лә баш мейеһендә ҡан әйләнеше боҙолоуы менән сирләүе ихтимал, әммә кем күрше-тирәһе менән яҡшы мөнәсәбәттә була, улар инсульттан тиҙерәк һауыға.

■ Ауырлы саҡта дөрөҫ туҡланмаған әсәйҙәрҙең балалары артыҡ ауырлыҡ менән йышыраҡ яфалана. Великобританияның Саутгемптон университеты ғалимдары әйтеүенсә, был осраҡта баланың организмында эпигенетик үҙгәрештәр барлыҡҡа килә: май алмашыныуын яйлаусы гендарҙың әүҙемлеге юғала. Бында әсәнең үҙенең тән ауырлығы күпме булыуы мөһим түгел, ябыҡ буйлы, әммә дөрөҫ туҡланмаған ҡатындың сабыйына ҡарағанда дөрөҫ туҡланған тулы кәүҙәле ҡатын-ҡыҙҙарҙың балалары һауыраҡ була. АҠШ-тың Беркли университеты табиптары был осорҙа тик экологик таҙа аҙыҡ-түлек һайларға кәңәш итә. Баҡтиһәң, ауырлы ҡатын пестицидтар, бигерәк тә органофосфат ашламалар менән эшкәртелгән йәшелсә һәм емештәрҙе йыш ашаһа, баланың интеллектуаль кимәле тиҫтерҙәренә ҡарағанда түбәнерәк булыуы ихтимал.

■ Дүшәмбе һеҙҙең өсөн ауыр көнмө? Улай булһа, аҙнаның һуңғы эш көнөн һәм ял көндәрен дөрөҫ үткәрегеҙ. Вирджиния штатының Рочестер университеты психологтары әйтеүенсә, ял көндәрендә кешеләр йышыраҡ ҡыуана һәм һәрҙәгерәк ауырый икән. Белгестәр аңлатыуынса, ял иткәндә кеше үҙен иркенерәк, тынысыраҡ тота, яҡындар менән аралашыу ҙа яҡшы тойғолар кисерергә ярҙам итә. Үҙегеҙҙе тынларға өйрәнегеҙ һәм күнелегеҙгә яткан эштәрҙе генә эшләгеҙ, тип кәңәш итә психологтар. Шул саҡта эш аҙнаһы ауыр булып тойолмаясаҡ, эшкә һәләтлелек тә күтәреләсәк. Ысынлап та, әгәр ҙә эш тураһындағы уйҙарҙан йәкшәмбе үк кәйефегеҙ боҙола икән, былдай эштең һеҙгә кәрәкме, юҡмы икәнлеге тураһында уйлана башларға ла кәрәк.

ҺАЙ, МАҺИРҘАР!

# ҠУЛЫҢ ЭШ БЕЛҺӘ...

## ярты бәхет - шул, тиҙәр



(Башы 1-се биттә).

### Ата-баба юлын ҡыуып

Мин Хәйбулла районы Аҡъяр ауылынанмын. Ғаиләбеҙҙә өс малай үҫтек, Ирек һәм Радик исемле ағайҙарым бар. Рәссамлыҡ һәләттәре булһа ла, улар үҙҙәрен икенсе йүнәлештә тапты. Үҙемә килгәндә, мин бәләкәйҙән һүрәт төшөрөргә, ағастан төрлө әйберҙәр яһап, уларҙы буярға яраттым. Мәҫәлән, малайҙар менән уйнағанда бөтәһенә лә бысаҡ, ҡылыс кеүек ҡоралдарҙы, уйынсыҡтарҙы ағастан мин яһап бирә инем. Әсәйем минең был һәләтемде күреп, VIII класҡа Аҡъярҙағы музыка мәктәбенең художество бүлегенә уҡырға бирҙе. Унда беҙҙе уҡытыусыбыҙ Вәлиуллина Таңһылыу Нариман ҡыҙы һүрәт төшөрөү нескәлектәре менән таныштырҙы, һәләтебеҙҙе камиллаштырырға һәм үҫтерергә ярҙам итте. Бында мин һүрәт төшөрөүҙе, картина яҙыуы еңел эш түгеллеген, быныҡ өсөн күп тир түгергә кәрәк икәнлеген аңланым. Үҙебеҙҙең башҡорт рәссамдары Ҡасим Дәүләткилдиевтың, Әхмәт Лотфуллиндың, Рәшит Нурмөхәмәтовтың, шулай уҡ бөтә донъяға билдәле рәссамдар Иван Шишков менән Исаак Левитандың картиналарына ғашиҡмын. Итальян рәссамы Леонардо да Винчиның эштәре айырыуса һоҡланыу уята.

Сәнғәт мәктәбендә уҡыған сағымда төүге ижад емештәрем менән районара, шулай уҡ республика буйынса уҙғарылған төрлө конкурстарҙа ҡатнашып, үҙ көсөмдә һынап ҡараным. Һүрәттәрем ошо конкурстарҙа әҙмекүпме баһа алғанға күрә, мәктәптә уҡығанымда уҡ рәсем сәнғәте буйынса уҡырға инермен, тип уйлағайным. Ә биҙәү-ғәмәли сәнғәте факультетына килеп эләгеүем осраҡлы ғына килеп сыҡты. Шулай ҙа бер ҙә үкенмәйем, сөнки егет кешегә ағас менән шөғөлләнеү ныҡыраҡ килешә, тигән фекерҙәмен.

Беҙҙән факультетҡа талантлы, ата-бабаларының юлын ҡыуырға, уларҙың сәнғәтен камиллаштырырға теләгән йәш оҫталар йыйылған. Беҙ ағастан юнып төрлө әйберҙәр эшләйбеҙ, берберебеҙ менән кәңәшләшәбеҙ, бергәбергә өйрәнәбеҙ. Был сәнғәт серҙәренә беҙҙе уҡытыусыбыҙ БАССР-ҙың атҡаҙанған рәссамы Ямалетдинов Ильдус Миниәхмәт улы төшөндөрә. Ул үҙе иҫ киткес оҫта ҡуллы кеше, ундайҙарҙы "алтын ҡуллы" тиҙәр. Беҙҙе лә ағасты яратырға, уны дөрөҫ файҙаланырға өйрәтә.

### Тәбиғәт мөғжизәһе

Ағасты мин тәбиғәттең иҫ киткес бер мөғжизәһе, тип атар инем. Кешелек үҫеше туранан-тура урман менән бәйләнгән.

Халҡыбыҙ ағастың үҙен генә ҡулланып ҡалмаған, шулай уҡ йүкә ҡабығын, ҡайын туҙы менән ороһон да киң файҙалана белгән. Бөтә йорт-ҡура кәрәк-яраҡтары һәм хеҙмәт ҡоралдары оҫта итеп яһалған һәм орнамент, бороңғо биҙәктәр менән семәрләп биҙәлгән.

Мин дә тулыһынса ағасҡа ғашиҡмын. Ҡуллана белһәң, ағастан иҫ киткес мөғжизәләр тыуҙырырға, уға "йән өрөргә" мөмкин. Бөтә ваҡытымды ошо шөғөлөмә бәйләп, ағастан төрлөләндереп тағы ла күберәк, үҙенсәлеклерәк эштәр эшләргә теләгем бар, тик ваҡыт яғы тарыраҡ шул. Әлеге ваҡытта уҡып йөрөйөм, шулай уҡ әсәйемә ауырға төшмәһен өсөн үҙем дә аҡса эшләргә тырышам. Ә ағас эше менән уҡыуҙан ҡайтҡас, кистәрен генә шөғөлләнергә мөмкинлек сыға. Шулай ҙа кистәрен шөғөлләнеү күпкә һөҙөмтәлерәк, сөнки көнөбөҙ ығы-зығылы, шау-шыулы тормошта мәшәҡәттәр менән үтеп киткәнгә күрә, көндөҙ бер ниндәй ҙә ижадҡа, фантазияға урын ҡалмай. Ә кискеһен һиңә бер кем ҡамасауламай, рәхәтләнеп уйланып эшләргә мөмкин. Ағас эше лә - үҙенә күрә ижад. Нимә эшләйһең, ниндәй биҙәктәр төшөрәһең, уның менән нимә аңлатырға тырышаһың - былар барыһы ла ижадтың бер төрө, тип әйтер инем мин.

Кешенең эше күп осраҡта уның күңел торошона бәйле. Мин эштәремде халыҡсан итергә тырышам, шуға күрә һәр бер эшемдә тиерлек башҡорт орнаменттарын, биҙәктәрен киң ҡулланам. Бала саҡта бысаҡ менән генә эшләп маташһам, хәҙер ярҙамға төрлө станоктар килә. Ағасты эшкәртеү буйынса мөмкинлектәр күбәйҙе. Интернет селтәрҙәрендә төрлө сайттар асылды, унда инеп, мастер-кластар ҡарап, файҙалы мәғлүмәттәр уҡып, белемеңде тағы ла камиллаштырырға мөмкин. Урамда йөрөп ятҡанда, йә ҡайҙалыр китеп барғанда йорттарҙы, семәрҙәрҙе ҡарап йөрөйөм, өйрәнәм, биҙәктәрен отоп алырға тырышам. Юғиһә, бөтә эштәрҙә лә бер биҙәкте генә ҡулланып булмай, бер төрлөлөк ялҡыта. Ә ят биҙәктәр шунда уҡ күҙгә ташланып бара, эшемә үҙенсәлек өҫтәй.

### Эштең тәме - аҙағында

Күптәр ағастан төрлө әйберҙәр яһауҙың бер ниндәй ҙә ауырлығы юҡ, тип енел генә был шөғөлгә тотоноп китергә уйлай һәм яңылыша. Беҙҙең эштә сабыр, түҙемле, йыйынаҡ, иғтибарлы булыу талап ителә. Ниндәйҙер эште башлаһам, аҙағына тиклем еткерергә тырышам. Аҙағына тиклем еткермәһәң, башламауың хәйерле, тип уйлайым. Шулай уҡ ҡул эштәремде кешегә тамамлағас ҡына күрһәтеүҙе хуп күрәм. Эштең тәме - аҙағында, тиҙәр бит. Күптәрҙең яңы ғына башланған, йәки яртыһына еткән эштәрен башҡаларға күрһәтеп маҡтаныуын аңлай алмайым. Ундайҙарҙың эше күбеһенсә башланған ерендә туктап ҡала торған. Гел генә ағас менән булышып ултырыуы ялҡытмаймы, тип һорағандары бар. Яраткан эш ялыҡтырмай ул, тип яуап бирәм мин уларға. Мин, киреһенсә, үҙемде үҫтерер, ҡулым оҫтарһын, шымарһын өсөн мөмкин тиклем күберәк эшләргә тырышам.

Үҙемдең эштәремде кешеләргә күрһәтеп, уларҙың баһаһын йәки тәнҡитен ишетһәм, тағы ла күңеллерәк булып китә. Шуға күрә үҙебеҙҙең сәнғәт буйынса ҡалала уҙғарылған төрлө күргәҙмәләрҙә ҡатнашырға, кешеләргә эш һөҙөмтәләремде күрһәтеп барырға тырышам. Уҙған йылда "Дельф уйындары" Рәсәй конкурсында эштәрем юғары баһаланды. Быңдай күргәҙмәләр күңелгә дәрт өҫтәй. Киләсәктә ошо юлды дауам итермен, шулай уҡ ювелир сәнғәте йәки архитектура, скульптура серҙәрен дә өйрәнә башлармын, тигән ниәттәмен.

Халҡыбыҙ ир-ат үҙ ғүмерендә ағас ултыртырға, өй һалырға һәм ул үҫтерергә тейеш, тигән. Башҡорт ир-егете булараҡ, мин дә ошо өс бурысты лайыҡлы башҡарып сыға алһам ине, тип уйлайым. Киләсәктә баш ҡалабыҙ янында ер алып, үҙ көсөм менән өй һалырға хыялланам. Йортомдоң ниндәй булырын әле үк күҙ алдына килтерәм, уға үҙемдең бар оҫталығымды һаласаҡмын. Минеңсә, бөгөнгө йәш кешенең мотлаҡ тәғәйен бер һөнәре булырға тейеш. Һөнәрһеҙ был донъяла бер нисек тә йәшәп булмай.

Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ФАТИХАЛЫ ҒАИЛӘ УСАҒЫ -

## Ерҙәге ожмах сағылышы ул



### Ир-егеттең бурыстары

Ир-егет дини ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ үтәргә, кәрәк түгел икән, ирҙәр менән ҡатындарҙың бер йортта булыуына юл ҡуймаҫҡа тейеш. Әгәр ҙә уға шундай шарттарҙа эшләргә тура килә икән, ул үҙенең һәр хәрәкәтен контролдә тоторға, шәриғәт ҡағиҙәләрен боҙмаҫҡа тейеш. Әгәр ир кеше үҙе эш биреүсе икән, ул үҙенең производствоһында төрлө хаталарҙан ҡасыр өсөн ирҙәр менән ҡатындар әҙерәк аралаша алырлыҡ шарттар тыуҙырырға тейеш.

Аҡыллы һәм зирәк ир-ат үҙенең сауҙагәрлек һәләттәрен тупһа аша ҡалдыра, ә эшендә үҙенең хис-тойғоларына ирек бирмәй.

Ғаилә ағзалары менән аралашҡанда ир-егет уларҙың хаталарын һәм үпкәләрен ғәфү итә, шулай уҡ уларға изгелек һәм шәфҡәтлелек менән ҡарай. Уға тормош юлдашының серҙәрен һәм етешһеҙлектәрен бер кемгә лә һөйләргә ярамай.

Шулай ҙа ғаилә хужаһы өйҙәгеләр динебеҙгә ҡаршы килгән аҙымдар яһаһа, талап сан булырға һәм Ислам мәсьәләһенә ҡағылған һорауҙарҙа ялҡаулыҡ һәм белемһеҙ-

*✔ Аллаһтың Рәсүле Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) тормошо бөтөн иманлыларҙан иманлы булыуы менән айырылып тора. Иман ҡеүәте һәм тәҡүәлек шул тиклем ныҡ, аҙ ғына шик тыуырҙай нәмәнән дә ул тыйылған.*



МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

**2005 йылда көньяҡ-көнбайыш Азияла булып үткән Цунами ваҡиғаһын иҫләүселәр барҙыр. Ул саҡта ҡайһы бер баҫмаларҙа: "Шри-Ланка һәм көньяҡ-көнбайыш Азиялағы башҡа дәүләттәргә ябырылған Цунами тулҡындарына Аллаһ Үҙенең исемен яҙҙы", тип хәбәр иттеләр. Коломболағы Ислам тикшеренеү үҙәге етәксеһе Мөхәммәд Фәйзин 26 декабрҙә сәғәт ун тулып үткән егерме минутта Digital Globe Quickbird ер юлдашы төшөргән фотоһүрәтте быға дәлил итеп килтерә. Икенсе бер ғалим да, "Ҡөрьән кешеләргә ут йәки һыу менән яза ебәреләсәге тураһында хәбәр итә", тип, шул афәтте телгә алып китә. Ысынлап та, Хаҡ Тәғәлә ҡушҡандарҙан тайпылыуҙары, боҙоҡлоҡто арттырыуҙары арҡаһында һәләк ителгән халыҡтар һәм ҡалалар тураһында Ҡөрьән сүрәләрендә асыҡ әйтелә. Былар барыһы ла Ахырызаман кешеләренә иҫкәртеү.**

# ИМАН ҠЕҮӘТЕ,

## йәки Мөхәммәт бәйғәмбәр өлгөһөнөң уйландырғаны



Аллаһы Тәғәлә тыйған әмерҙәр байтаҡ. Шуларҙың береһенә генә туҡталмаҡсыбыҙ. Әйтәйек, бурлыҡ мосолман халыҡтарында ныҡ таралмаған ине. Ләкин алама ғәҙәт сир һымаҡ тиҙ йоға. Хосусилаштырыу һымаҡ һәр төрлө кампаниялар илебеҙгә ыңғай нәмәләр менән ҡуша кире төшөнсәләрҙе лә алып килде. Дөрөҫ, ҡаҙна малына ҡул һуҙыу элек тә булған, ләкин тап ошо осорҙа ул ныҡ тамыр йәйҙе. Илебеҙҙә "коррупция" хатта ғәҙәти һүҙ кеүек ҡабул ителә башланы. Власҡа үрләү кемдәрҙер өсөн халыҡ ҡаҙнаһын үҙе теләгәнсә файҙалана алыу мөмкинлеге һымаҡ ҡабул ителде. Юғарыға үрләү бәгзеләргә үҙ кеҫәһен ҡалынайтыу өсөн ирек алыу ине. Ундай мөмкинлеккә эйә булмағандары "тормош рәхәтлеге, бәхет шулай икән" тип, тегеләренә көнләшеү менән ҡараны.

Ни өсөн беҙҙең ата-бабаларыбыҙ бындай шөғөлгә бармаған һуң? Ерһыу, тел тип яу сапҡандар, ҡан ҡойғандар, Себер киткәндәр... Әллә улар рәхәтлекте аңлап бөтмәгәндәрме? Хатта улар һаҡлаған, ҡайнар ҡандары тамған ерҙәр, изгеләштергән урындар арзанға ғына һатыла, ә халҡы был турала белмәй ҙә ҡала... Торатау ваҡиғаһы шуның бер юғары нөктәһе булманымы ни? Ул киләсәк быуын өсөн ғибрәт һәм һабаҡ. Етмәһә, шунда тантаналы шарттарҙа Салауат көндәре уҙыуы... Уйлай китһәң, башҡа һыймаҫлыҡ.

Бер төрлө һөйләп, тап киреһен эшләү - шайтан ҡушҡанса йәшәү. Ул йоҡламай, уяу һәм кешелекте хаҡ юлдан яҙҙырыу өсөн нимәне генә файҙаланмай. Ахыр, имандан яҙған кеше анһат юл менән байыуҙы, әлбиттә, оҫталыҡ тип ҡабул итә башлай. Байлыҡ яратыу, муллыҡҡа ынтылыу әҙәм балаһына тыумыштан бирелгән. Ләкин ул бит кешенең нәфсеһен һынау өсөн бирелгән. Урлашыу, бурлыҡ Аллаһы Тәғәлә тыйған ҡаты әмер. Һәр ҡылған ғәмәл өсөн хисап бирергә тура киләсәген уйламаймы бындай ҡомһоҙҙар? Бәлки, улар "мин ҡотолоп ҡалырмын", тип өмөт итәләр? Нисек итеп? Әллә харам юл менән туплаған болон мохтаждарға таратып бирергә йыйынамы? Китапта әйтелгәнсә, ә Хисап көнө барыбер киләсәк. Аллаһ ҡушҡанды үтәй алыуы, Аллаһты яратыуы һәм Унан ҡурҡыуы аша баһаланасаҡ бөтәһе лә. Ошоно белә тороп та, ҡай берәүҙәрҙе нимә һуң кеше хаҡына ҡул һуҙырға, харам мал йыйырға мәжбүр итә? Шәреҡтә талап ҡаты, бурҙың хатта ҡулын ҡырҡыуға тиклем яза бирәләр.

Ә ҡаҙнаны юҡ итеүселәр тураһында нимә әйтергә була? Власть - һынау. Уны ни өсөн кемдер үтәй ала, икенсеһе тулыһынса нәфсе ҡолона әүерелә. Миңә бер танышым, шундай юғары урын биләһәм, мин нимә эшләр инем икән, юҡ, ундай һынауҙы үтеп булмайҙыр, тигәнерәк фекер әйткәйне. Үҙенә ышанмауҙан, әллә, гөмүмән, ғәҙеллеккә ышанмауҙан тыуамы бындай фекер? Сөнки кибеттән икмәкме, колбасамы урлағанды тотһалар, хөкөмөн дә йәһәт кенә сығаралар. Ә бына юғары структураларҙағы коррупцияны юҡ итеү, ниндәйҙер һөҙөмтәләргә ирешеү... Беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙы ошондай ҡомһоҙлоҡтан, кеше өлөшөнә инеүҙән нимә тотҡан һуң? Иман, әлбиттә. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) йәшәү рәүеше, сөннәте үрнәк булған. Бөгөн дә иман юлына ынтылғандар, нәфселәрен тыя белгәндәр бар. Беҙ тәҡдим итәсәк яҙмала кешелектең юғары үрнәге Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) ғүмер юлындағы ҡайһы бер ваҡиғалар ғына телгә алына. Күҙ йәштәреләй саф (бер үк ваҡытта әсе лә, татлы ла) намыҫ - әҙәм балаһының иң оло зиннәте. Кешелектең лидеры Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) тормошо хаҡ юл эҙләгән ҡай берәүҙәр өсөн һабаҡ һәм уйланыу, киләсәк өсөн иҫкәртеү һәм йәшәү өлгөһө булһын. Был яҙма шул маҡсаттан тәржемә ителде.

### Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тәҡүәлеге һәм иман ныҡлығы

Аллаһтың Рәсүле Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) тормошо бөтөн иманлыларҙан иманлы булыуы менән айырылып тора. Иман ҡеүәте һәм тәҡүәлек шул тиклем ныҡ, аҙ ғына шик тыуырҙай нәмәнән дә ул тыйылған. Бындай юғары сифатҡа эйә кешене хатта табыуы мөмкин дә түгел. Бәйғәмбәр барлыҡ эшғәмәлен тик иман нигеҙендә ойоштorған. Хаҡ Тәғәлә алдында тәҡүәлеге көслө булыу арҡаһында хатта ки йөрәге бына-бына туҡталырға әҙер торған; шул тиклем нескә күңелле һәм тәьҫирләнеүсән кеше, күҙенән йәш ҡойолмаған һәм бөтә тәне менән ҡалтыранмаған сағы ла бик һирәк булған. Тулҡынланған сағында ул - диңгеҙгә, тынысланған сағында ул - диңгеҙгә, тынысланғанда океанға бәрәбәр.

Ә был донъяны артыҡ яратҡан һәм гонаһ ҡылыу кеүемен кейеп ҡарарға сирҡанмаған хәҙерге әҙәмдәр өсөн бөтөн ғүмерен ошондай тәҡүәлек һәм иман менән үткәреүсе бындай кеше, әлбиттә, үҙ-үҙен алдаусы булып күренә, шул арҡала хәҡиҡәтте һанға һуҡмаҫҡа маташыусылар барлыҡҡа килде. Ләкин Аллаһ үҙенең Рәсүлен шул тиклем оло юғарылыҡҡа күтәрҙе, ер өҫтөндә уны ҡараларға маташыусыларҙың тауышы уға барып етмәйәсәк. Шулай булғас, бысраҡлыҡтары нисек уға барып тейһен ти инде? Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.) - иман, намыҫ, сафлыҡ, тәҡүәлек өлгөһө, эшмәкәрлегенең хаҡлығы шул тиклем бөйөк, берәү ҙә һәм бер нәмә лә уны языҡ эшкә яҡын килтерә алмаған.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА тәржемә итте.**
**(Дауамы бар).**

---

лек менән көрәшергә бурыслы. Бының өсөн ир-егет бөтә көсөн һалырға, шулай уҡ абруйлы нәсихәтселәрҙең тәжрибәһен һәм белемен ҡулланырға тейеш. Үрҙә әйтелгәндәрҙең барыһы ла ғаилә башлығының бурысы булып тора.

Ир-егет ғаилә ағзалары менән яғымлы һөйләшергә һәм үҙенең насар кәйефен күрһәтмәҫкә тырышырға тейеш. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Һеҙҙең арала иң яҡшыһы - үҙенең ҡатыны менән яҡшы мөғәмәлә иткәне", - тигән.

Ғаилә эштәрен алып барғанда ир-егеткә ҡатыны менән кәңәшләшергә, шулай уҡ уға балаларҙы тәрбиәләүҙә ярҙамлашырға ҡушыла. Юғиһә, балаларҙы ҡарарға һәм йорт эштәре менән булышырға ҡатын-ҡыҙҙың бер үҙенә ауырға төшә, ә ир-егеттең ярҙамы бары тик уларҙың мөнәсәбәтен генә яҡшыртасаҡ. Шулай уҡ ул үҙенең ҡатынына доға ҡылырға тейеш.

Ир-егеткә ҡатынын иҫкәртмәй тороп алыҫ сәйәхәткә сығырға, өйгә таныш булмаған ҡунаҡтарҙы алып ҡайтырға рөхсәт ителмәй. Шулай уҡ ир-егеткә ҡатынын үҙенең йәшенә тура килгән ир-ат енесен хеҙмәтләндерергә мәжбүр итеү тыйылған. Ғаилә башлығы ғаиләһен кәрәк булмаған кешеләр менән аралашыуҙан сикләргә тырышырға тейеш.

Ислам дине ғаиләне тулыһынса ир-егеткә ышанып тапшырған һәм уға бөтә ғаилә ағзаларының матди һәм рухи ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өҫтөнлөгө биргән. Үҙенең бөтә белемен, тәжрибәһен, аҡылын һәм көсөн ғаилә именлеге өсөн һалған атай кеше, әлбиттә, үҙе лә ихтирамға һәм һөйөүгә лайыҡ. Шуға күрә Ислам ғаилә башлығына ҡарата ҡатындың һәм балаларҙың насар мөнәсәбәтен ҡәтғи рәүештә тыя.

---

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Ҡиммәт баһаланған кире программаланыу

Дини инаныуҙар ҙа һеҙҙе кире программалауы мөмкин. Мәҫәлән, киң таралған "Аҡса - яуызлыҡ", "Аҡса бары тик алдаҡсыларҙа ғына була" тигән ышаныуҙар беҙҙең көндәргәсә һаҡланған һәм килеп еткән. Әммә улар нигеҙһеҙ. Тағы бер миҫал: "бысраҡ аҡсалар". Күрәһең, бындай инаныуҙар менәр йылдар элек, вәғәзҙе яңылыш аңлауҙан килеп сыҡҡандыр. Ғайса бәйғәмбәр: "Бер кем дә бер юлы ике әфәндегә хеҙмәт итә алмай: йә береһен күрә алмаясаҡ, икенсеһен яратасаҡ; йә береһенә тырышып эшләп, икенсеһенә ғәмһеҙ буласаҡ. Аллаһҡа һәм маммонға хеҙмәт итә алмайһығыҙ", - тигән. Шунда уҡ "Ерҙә, көйә күбәләге һәм тут юҡҡа сығарған, бурҙар урлаған урында үҙегеҙгә байлыҡ йыймағыҙ; күктә, көйә күбәләге һәм тут юҡҡа сығара алмаған, бурҙар урлай алмаған урында байлыҡ туплағыҙ, сөнки һеҙҙең байлығығыҙ ҡайҙа, йөрәгегеҙ ҙә шунда", тиелә.

Быны бары тик матди байлыҡҡа ҡыҙығып, рухи ҡиммәттәрҙе һанға һуҡмаусыларға әйтелгән тип аңларға кәрәк. Ул ваҡыттарҙа, бөгөнгө кеүек үк, тормош өсөн аҡса кәрәк булған, ә һуңыраҡ Аллаһ йорттарында аҡсаның булыу мөһимлеге хаҡында һөйләй башлағандар.

Бөгөнгө көнгә тиклем һеҙ һүҙегеҙгә буйһондоғоҙ, улар һеҙгә байлыҡтың лайыҡлы ағышын быуып торҙо. "Тин һумды һаҡлай" тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр. Бер тинеңде һаҡлап ҡалдың икән, тимәк, бер тин эшләнең. Әгәр мең һумығыҙҙы һаҡлап ҡалһағыҙ, тимәк, мең һум эшләнегеҙ. Бындай вариант аңға тиҙерәк барып етә.

Һеҙ оноторға тейешле башҡа раҫлауҙар ҙа бар. Мәҫәлән: "Аҡса туҙҙырыу уны эшләүгә ҡарағанда еңелерәк", "Рәссамдар (актерҙар, яҙыусылар һ.б.) ярлылыҡта йәшәргә тейеш", "Тәүҙә башҡаларға, уларҙан һуң ғына үҙемә", "Мин байлыҡҡа лайыҡ түгел"... Яҙыусы Луиза Хэй 500 доллар отоп, дәрескә ҡыуанып килгән бер уҡыусыһы тураһында былай тип яҙа: "Мин ышанмайым, - тип ҡабатлай ул. - Мин бер ваҡытта ла бер нәмә лә отҡаным булманы". Күрәһең, ул был аҡсаға лайыҡлы түгелмен, тип уйлай. Бер аҙнанан ул бөтөнләй уҡыуға килмәне, сөнки аяғын һындырғайны. Дауаланыу тап 500 доллар тора ине".

Бер кемгә лә үҙен ярлы булғаны өсөн әрләүҙәре оҡшамай, әммә байлыҡҡа һәм ярлылыҡҡа ҡарата шәхси инаныуҙары уның яҙмышын хәл итә. Бай булыу өсөн һеҙ байлыҡ тураһындағы күҙаллауҙарығыҙҙы үҙгәртергә тейешһегеҙ.

Үҙбаһағыҙҙы ерле юҡҡа күтәреү һеҙҙе бай яһамаҫ. Хәйер, был етешһеҙлек түгел, һеҙ, ысынлап та, нимә эшләйһегеҙ һәм нимә эшләргә һәләтлеһегеҙ - шуны юғары баһалай алаһығыҙ. Үҙ инаныуҙарығыҙҙы анализлап, улар араһында кире һәм байлыҡҡа, матди етеш тормошҡа кәртә булып торғандарын табырға кәрәк.

Әгәр: "Йыһан байлыҡҡа тулы, һин үҙ өлөшөңдө алырға хаҡлы", - тиһәләр, асыуланырһығыҙмы? Бәлки, быға ышанмаҫһығыҙ? Йәиһә был бары хыял ғына тип уйларһығыҙ...

Аҡса туҙҙырғанда нимә тояһығыҙ? Үҙегеҙҙе ғәйепле тоймайһығыҙмы? Өҫтәлдә түләүегеҙҙе көтөп ятҡан квитанцияларға ҡарап нимә уйлайһығыҙ? Улар һеҙҙе еңергә теләгән дошмандармы, әллә депрессия сәбәптәреме?

Ярлыларҙы ярлыраҡ итеүсе бик күп фекерҙәр бар. Байҙар кеүек фекерләгеҙ - шунда уҡ аҡсағыҙ барлыҡҡа килер.

Эйе, Йыһанда, ысынлап та, байлыҡ күп, аҡса үҙе беҙҙең ҡулға килергә атлығып тора - бигерәк тә аңығыҙ алдағы биш бүлектә яҙылғандар һөҙөмтәһендә уларҙы ҡабул итергә әҙер булһа.

**Роберт СТОУН.**



## 16 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Выхожу тебя искать", 4-я и 5-я серии. Сериал
23.30 Ночные новости
23.50 "Следствие по телу", 10-я серия
00.40 "Люди Икс"
02.35, 03.05 "Парк культуры и отдыха"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 54-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 81-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 157-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Крутые берега", 9-я, 10-я и 11-я серии. Сериал
23.15 "Городок"
00.10 "Вести+"
00.30 "Профилактика"
01.40 "Пристрели луну". Драма
04.15 "Городок"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Бомбила", 1-4-я серии. Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
